*Беҙ йыш ҡына тормошобоҙҙо быяла кәртәләр менән сикләйбеҙ. Беҙҙең ижад иткебеҙ килә, әммә күҙгә күренмәгән төрмә һаҡсылары беҙгә: "Һин быны булдыра алмайһың. Был тормошҡа ашырлыҡ әйбер түгел. Көс етмәйәсәк. Бик ҡиммәткә төшәсәк. Кеше көләр. Һин әлегә йәш әле. Ҡартайғанһың инде. Сәләмәтлегең насар. Быға ата-әсәйең рөхсәт бирмәйәсәк. Бик күп ваҡыт талап ителәсәк. Һинең кәрәкле белемең юҡ", - тип иҫкәртеп тора.*

***Джон Макс ТЕМПЛТОН.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№42 (564)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Замана Мавродийҙары** 5



**Ғабдрахман Рәсүлевтың...** Диниә назаратын һаҡлап ҡалғаны 7



**Үлмәҫбикә инәй хәсиәте** 8



**Бәйгеләрҙә бил нығыта...** үҙе лә, уҡыусылары ла 9



14 **ТВ-программа**


*ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА*



# ҒАИЛӘБЕҘ МЕНӘН УҠЫЙБЫҘ

**"Киске Өфө" - беҙҙең ғаилә гәзите ул. Киоскынан һатып алып мәшәҡәтләнмәйбеҙ, сөнки унда был гәзит булмай сыға: бер-ике дана ғына бирелгәнлектән, уны шундуҡ һатып алып та китәләр. Шуға күрә "Киске Өфө"нө, Башҡортостан"ды,"Башҡортостан ҡыҙы"н, "Ағиҙел" менән "Ватандаш"ты, шулай уҡ "Тамаша"ны өйгә алдырып, рәхәтләнеп уҡыйбыҙ.**

Клара еңгәгеҙ ҙә, шәмбе етә башлаһа, "Киске Өфө" килмәнеме әле, тип көтөп кенә тора. Күптән түгел ғаиләм менән Әбйәлил районының Күсем ауылында булдыҡ: данлыҡлы генералыбыҙ Таһир Кусимовтың музейына нигеҙ һалыусы, СССР халыҡ мәғарифы отличнигы ҡайным Ғүмәр Ғилманов иҫтәлегенә мемориаль таҡта асыу тантанаһында ҡатнаштыҡ. Шунда мин ауыл халҡы менән аралашҡанда уларҙың "Киске Өфө" гәзитен алдырып, яратып уҡыуы тураһында белеп, бик ҡыуанып ҡайттым. Унда гәзиттең ялҡынлы патриоты Ф. Ҡаҙаҡбаева тигән һылыу эшләй икән клубта. Унан ары Хәйбулла районының Мәмбәт ауылына ла һуғылдыҡ. Унда ла ошо гәзитте телдәренән төшөрмәй ауыл халҡы. Быныһы өсөн йәнә ҡыуандыҡ.

Шул уҡ ваҡытта аптыраным да: үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ - ауыл халҡының әллә ни аҡсаһы ла юҡ инде ул, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу йүнен тапҡандар бит! Сөнки был гәзит улар өсөн күңел ихтыяжы икәнлеген аңланым мин. Теге йәки был мәҡәлә буйынса фекер алышалар, бәхәсләшеп тә китәләр - ҡыҫҡаһы, битараф, туң күңелле түгелдәр, шуныһы һөйөндөрҙө бигерәк тә. Әйткәндәй, Хәйбулланан крайҙы өйрәнеүсе бай фекерле "Киске Өфө" авторы Рәшит Насировтың мәҡәләләрен үҙем дә бик ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Тимәк, гәзит - уҡыусы бәйләнеше ике яҡлы: уҡыусы - гәзит мөнәсәбәттәренә лә ныҡлы нигеҙ һалып өлгөргән "Киске Өфө". Тимәк, гәзиттең халыҡҡа әйтер һүҙе бар һәм ул алыҫ, төпкөл ауылдарҙа йәшәһә лә, һәр кемдең күңеленә барып етеп тора.

Һәр заманда ла матбуғаттың аныҡ бурыстары булды. Хәҙер элекке коммунистар партияһы заманындағы идеология ҡалыптарынан азатбыҙ, мәгәр халыҡты туплаусы бер көскә әүерелеп, уның рухи ихтыяждарына яуап биреүсе, кешелә тыуған еренә, халҡына, теленә һөйөү тәрбиәләү, ғаилә ҡиммәттәрен данлау, айыҡ һәм сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау, бөгөнгө шарттарҙа хужалыҡ итеү, аҡса эшләү юлдарын өйрәтеү, халҡыбыҙҙың зыялыларын, эшҡыуарҙарын өлгө итеп күрһәтеү кеүек оло һәм изге бурыс үтәй икән дә баһа гәзитебеҙ! Уҡыусы бына ошондай гәзиткә генә яҙыла һәм уҡый бөгөн.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә почта бүлексәһендә үҙебеҙҙең бая теҙеп әйтеп киткән матбуғат баҫмаларына яҙылырға барғанда бер хәбәр ишетеп, аптырап киттем. Ҡайһы вузда булғандыр был - төпсөнмәнем, әммә студенттарҙы бер уҡытыусы "Әгәр шундай-шундай журналға яҙылмаһаң, зачет ҡуймайым", тип ҡурҡыта икән. Меҫкен студенттың ашарға ла аҡсаһы юҡтыр, бәлки. Стипендия - хәйерсе тиндәре генә, уныһын да әллә ала ул, әллә юҡ. Ата-әсәһе көсө менән коммерцияла уҡыусылар ҙа күп бит. Ярай, ул әлеге уҡытыусыһы әйткән журналға яҙылды ла, ти, ләкин уҡырмы һуң ул был баҫманы? Уның рухи ихтыяждарына яуап бирәме һуң ул баҫма? Үткер публицистика, тарихыбыҙ төпкөлдәрен айҡаған, рухты уятҡан мәҡәләләр, сығыштар, бәхәстәр, фекер алышыуҙар көҫәй бит хәҙер уҡыусы. Ошо йәһәттән уларҙың ихтыяжына яуап биргәнгә күрә лә "Киске Өфө"нө алдыраларҙыр, тием, сөнки унда, ысынлап та, публицистика ла, тәнҡит тә, тарихыбыҙға серле сәйәхәт сәхифәләре лә етерлек. Ә былар бөгөнгө уҡыусы күңелен әйҙәүсе һәм дә арбаусы темаларҙың тап үҙе.

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# МОСТАЙ ҺЫНЫ...

## һәйкәл булып ҡалҡты



**Өфөлә Профсоюздар йорто алдында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә һәйкәл асыу тантанаһы булып үтте. Әҙәбиәт өлкәһендәге мөһим ваҡиғаны билдәләргә ҡала етәкселеге, яҙыусылар, сәнғәт эшмәкәрҙәре, шиғриәт һөйөүселәр һәм әҙиптең ижадына битараф булмаған өфөләр килде. Шулай уҡ тантанала Татарстан шағирҙары Ренат Харисов менән Роберт Миңнуллин, Сыуашстандың халыҡ шағиры Валерий Тургай ҡатнашты.**

**(Дауамы 4-се биттә).**

✔ Ағаһы Шүлгән кешелеккә, туғандарына ҡарата ниндәй генә яуызлыҡтар ҡылһа ла, Урал батыр уны үлтермәй, аяй. Сөнки ул Шүлгәндең йөнен ҡыйған мәлдән үҙе лә яуызлыҡ юлына баҫырын аңлай.



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ДОНЪЯ - ҠУЛАСА...

## әйләнә лә бер баҫа

**Был әйтемдең мәғәнәһен аңлауы еңел генә һымаҡ тойола. Ысынлап та, донъя ҡуласа, Ер шары кеүек түп-түңәрәк инде ул. Туп-тура һәм кинәйәһендәге мәғәнәлә лә ул шулай. Ер үҙ күсәрендә, бер үк ваҡытта Ҡояш тирәләй ҙә бер туҡтауһыҙ әйләнеп йөрөгән һымаҡ, барыһы ла кешегә кире әйләнеп ҡайта. Уйҙары ла. Ғәмәлдәре лә. Изгелеге лә. Яуызлығы ла. Мөхәббәте лә. Нәфрәте лә. Фәҡәт әжәл генә әҙәмде был ҡуласанан ҡотолдора алған һымаҡ булып тойолһа ла, әхирәткә күсеүсе ҡуласаның тағы ла киңерәгенә, упҡындарҙың икһеҙ-сикһеҙ сөмбәйҙәренә, һынауҙарҙың ҡотолғоһоҙ ааһыҙына эләгә, тиҙәр. Аш Шиблиҙың үлем тураһында шундай һүҙҙәре бар: "Үлем өс төрлө була: был донъя өсөн үлеү, теге донъя өсөн вафат булыу һәм Аллаһы Тәғәлә юлында һәләк булыу. Был донъяға һөйөү менән йәшәп үлеүселәр - ике йөҙлөләр, теге донъяға һөйөү менән вафат булыусылар - намыҫлылар, ә Аллаһы Тәғәләгә барған юлда һәләк булыусылар - суфыйҙар".**

Хатта ки елгә ҡаршы төкөрөүең дә үҙ-үҙеңә төкөрөүгә тиң һанала. Шул уҡ ваҡытта елгә ҡаршы төкөрөүҙе тыйыу, логика күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, ел ыңғайына төкөрөргә мөмкин тигәнде лә аңлатҡан кеүек. Әммә мөмкинме, ярайҙмы икән? Ни өсөн тигәндә, Ер шары түңәрәк булғас, иртәме-һуңмы, тағы ла елгә ҡаршы төкөргән кеше хәленә тороп ҡаласаҡһың бит. Бында, әлбиттә, оло кинәйә ята. Элегерәк өлкәндәрҙең ергә, һыуға төкөрөргә ярамағанлығын аңлатыуҙары бер ҙә юҡтан биргән һабаҡ булмағандыр. Тимәк, был осраҡта кеше үҙ-үҙенә, үҙенең йөҙөнә төкөрә булып сыға.

Ҡыҫҡаһы, ҡайҙалыр ебәргән әйберҙең, төшөнсәнең үҙеңә кире әйләнеп ҡайтыуы хаҡындағы күренеш физикала һәм философияла "Бумеранг законы" тип атала. Был законды өйрәнеүселәр бумерангтың әйләнеп ҡайтыу мөҙҙәтен төрлөсә билдәләй. Шуларҙың араһынан "бумерангты осорған мәл, миҙгел" тигәне бигерәк ҡыҙыҡлы. Әйтәйек, әлеге мәл, әйтәйек, 2013 йылдың 19 октябре теүәл бер йылдан, йәғни Ер Ҡояш тирәләй теүәл бер тапҡыр әйләнеп сыҡҡас, 2014 йылдың 19 октябрендә әйләнеп ҡайтасаҡ. Был осраҡта, тимәк, ел ыңғайына төкөрөүең дә үҙеңдең битеңә төкөрөүең булып аңлашыла.

Беҙ кемгәлер яҡшылыҡ эшләһәк, күпмелер ваҡыт үткәндән һуң үҙебеҙ ҙә шул кеше тарафынан эшләнгән яҡшылыҡты тоябыҙ һәм быны үҙебеҙ эшләгән яҡшылыҡ өсөн яуап, "яҡшылыҡҡа-яҡшылыҡ" итеп ҡабул итәбеҙ һәм ныҡ янылышабыҙ. Ни өсөн тигәндә, яҡшылыҡҡа алмашҡа, йәғни иҫәп буйынса ҡылынған яҡшылыҡ әхлаҡ нормаларына һыймай, ул яһалма, хәйләгә ҡоролған булыуы ла бар. "Мин -һиңә, һин - миңә" принцибы бары тик баҙар өсөн ҡулай. Ғөмүмән, иҫәп буйынса яҡшылыҡ та, изгелек тә эшләнмәй. Был осраҡта беҙ бары тик ҡасандыр үҙебеҙ ҡылған яҡшылыҡтың, изгелектең үҙебеҙгә кире әйләнеп ҡайтыуына ғына шаһитбыҙ.

Үтә ныҡ ҡартайып киткән атаһын улы ҡарттар йортона урынлаштырып ҡайтҡас, үҙенең 5 йәшлек улы:



-Атай, ҡарттар йортонон адресын яҙып алырға онотмаңыңмы ул? - тип һораған.

-Юҡ, нинә, улым, һин әллә ҡартатайың янына барып йөрөргә уйлағайыңмы? - тиған атаһы улына.

-Юҡ, һин дә ҡартатайым һымаҡ үтә ҡартайғас, үҙеңде ҡайһы адрес буйынса алып барырға икәнлекте алдан уҡ белер өсөн кәрәк, - тиган улы тыныс ҡына.

Бына был осраҡта беҙ "Бумеранг законы"ның тиҙ генә үтәлеше миҫалын күрәбеҙ. Дөрөҫөрәге, был закон атаһын ҡарттар йортона алып барған кешенең үҙ ҡартлығы килеп еткәс үтәләсәк, ә ул кеше хәҡиҡәтте, үҙен киләсәктә нимә көткәнен күпкә алдараҡ аңлай.

Беҙ һәр ваҡыт яуызлыҡ үҙ яҙаһын алырға тейеш, тип уйлайбыҙ. Ниндәй яуызлыҡ та, ниндәй яза һуң әле? Ғөмүмән, яуызлыҡҡа яза сығарырға кәрәкме? Яуызлыҡты язалап буламы? Миненсә, "бумеранг законы" эшләгән осраҡта был мөмкин дә түгелдер. Сөнки язалаусының яуызлыҡ ҡылыусыға осорған яза бумеранғы барыбер үҙенә әйләнеп ҡайтасаҡ. Был хәҡиҡәт "Урал батыр" эпосында бик асыҡ сағыла. Ағаһы Шүлгән кешелеккә, туғандарына ҡарата ниндәй генә яуызлыҡтар ҡылһа ла, Урал батыр уны үлтермәй, аяй. Сөнки ул Шүлгәндең йөнен ҡыйған мәлдән үҙе лә яуызлыҡ юлына баҫырын аңлай. Эпоста "Бумеранг законы" бар тулылығында эшләй. Етмәһә, улар бер туған, йәғни яҡшылыҡ менән яуызлыҡ - бер туғандар.

"Елгә ҡаршы төкөрмә" әйтеменең тағы ла тәрәнерәк фекерләүгә талап иткән ике варианты ла бар, улар: "Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң" һәм "Ауыртмаған яғына ят". Был әйтем-мәҡәлдәрҙең һәр ҡайһыһы хаҡында оҙон-оҙаҡ итеп һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Уларҙың барыһын да "Донъя - ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа" тигәне дөйөмләштереп, берләштереп тора кеүек. Шулай ҙа был мәҡәл-әйтемдәрҙең классик кимәлдәге аңлатмаһы түбәндәге риүәйәттә нығыраҡ сағыла кеүек:

"Бер батшаның башҡа батшалыҡтар һәм дәүләттәр менән борсағы бигүк бешеп етмәгән икән. Бына бер мәл ҙур хәрби көскә әйә кеүәтле күршеләш дәүләт менән ике араны яраштырырға йүнәлтелгән осрашыуҙары уңышһыҙ тамамланғас, асыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән батша үҙенең баш кәнәшсеһенең сикәһенә һуҡҡан.

Үҙе тоғро хеҙмәт иткән батшаһының көтмәгәндә сикәһенә һуғыуынан күҙенән осҡондар сәсрәгән баш кәнәшсенең башы әйләнеп киткән. Ул сикәһенең әсеүенән түгел, ғәрләнеүенә бөйлә йөрәк яныуынан өйәнәгә тотоп, ни эшләргә лә белмәйенсә, батшалыҡта иң тәүҙә юлында осраған икенсе кәнәшсенең сикәһенә һуғып ҡына үҙен бер аҙ тынысландыра алған. Икенсе кәнәшсе иһә, үҙ сиратында, министрҙы сикәләү менән һыйлаған, министр үҙенең ярҙамсыһын "ҡыуандырған". Ҡыҫҡаһы, сикәләү эстафетаһы ярты сәғәт эсендә тотош батша һарайын урап сығып, баш ҡала урамына уҡ сығып киткән.

Кис батшаның баш кәнәшсеһе үҙ йортона ҡайтҡан. Йоҡларға йыйынып йөрөгәнендә янына килгән ҡатыны көтмәгәндә уның сикәһенә эләктергән.

-Ни эшләүең ул был һинең? - тигән сикәһен ике ҡулы менән тотоп, ни эшләргә лә белмәгән баш кәнәшсе.

-Зинһар, мине ғәфү ит, әммә ҡала кешеләре бөгөн көнө буйы урамда бер-берећенең сикәһенә һуғышты. Мине лә һинең әсәйең сикәләне. Ҡайтарып уға һуға алмайым бит инде. Ғөмүмән, мин һинән башҡа бер кемдең дә сикәһенә һуға алмайым...

-Ҡыҙыҡ был хәл, - тип көләмһерәгән кәнәшсе, - минең кәнәшсене сикәләүем көнө буйына ҡаланы урап сығып, кире үҙемә әйләнеп ҡайтты..."

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереүгә булышлыҡ итеү федераль фондының эконом-класс торлағы төҙөү, шул иҫәптән бындай торлаҡ төҙөү маҡсатында уларҙы комплекслы үҙләштереү өсөн бушлай файҙаланыуға йәки ҡуртымға тапшырылған ер участкаларында төҙөлгән эконом-класс торлағы һатып алыуға хоҡуғы булған граждандарҙың исемлеген төҙөү ҡағиҙәләре һәм күрһәтелгән граждандарҙы был исемлеккә индереү тәртибе тураһында" закон проекты өҫтөндә эш дауам итә. Закон проекты льготалы торлаҡ һатып алыуға дәғүә итеүсе граждандар исемлеген төҙөү процедураһының асыҡлығын арттырыуға йүнәлтелгән.

✔Башҡортостанда Милли-тикшеренеү университеты ойошторою һәм юғары уҡыу йорттарын Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерләү мәсьәләләре республика Президенты Рөстәм Хәмитовтың Рәсәй Федерацияһының мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Александр Климов менән осрашыуының төп темаһы булып торҙо. Бөгөн Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт нефть техник университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты "Милли тикшеренеү университеты" статусы алыуға конкурс һайлап алыуында ҡатнашыу өсөн программалар әҙерләй.

✔Монголияла үткән ҡатын-ҡыҙҙар араһында шашка буйынса халыҡ-ара чемпионатта Башҡортостандан ике донъя чемпионы ҡатнашты. "Йәшен тиҙлегендәге" уйын программаһында донъяла иң уңышлы чемпион Айгөл Иҙрисова һәм иң абруйлы классик программала донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина уйнаны. Иҙрисова үҙенең донъя чемпионы титулын һаҡлап ҡала алманы. Уңышлы уйын күрһәтеп, Тамара Танһыҡҡужина бөтә турнир барышында Зоя Голубева менән беренсе урынға дәғүәләшеп, һөҙөмтәлә өсөнсө урынды яуланы.

✔Өфөнөң иҫтәлекле урындарында QR-код менән табличкалар ҡуя башланылар. Һуңғы ике ай эсендә бындай табличкалар туристик индустрия күҙлегенән ҡыҙыҡлы 16 объектҡа ҡуйылды. Табличкаға объекттың исемен башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә һәм QR-кодтың үҙен урынлаштыралар. Смартфон, коммуникатор йәки планшеттың фотокамераһы аша махсус программа ярҙамында QR-кодты уҡып, ҡулланыусы автоматик рәүештә ҡала хакимиәтенең порталына күсә. Унда ул туристик объект тураһында тулыраҡ мәғлүмәт белә, фото һәм тарихи һүрәттәр ҡарай ала.

"Башинформ"дан.

✓ *Тирә-яҡ мөхиткә авария ҡалдыҡтарын сығарыуҙы автоматлаштырылған контролләү системаһы оператив режимда "тәртип" боҙоусы предприятиеларҙы асыҡлау һәм уларға ҡарата тейешле саралар күреү мөмкинлеген бирәсәк.*



*БАШ ЙОРТТА*



# КҮТӘРМӘ СЕРЕ...

**Бала саҡта өләсәй, өйөң таҙа булмаһа ла, күтәрмәң һәр ваҡыт таҙа булһын, сөнки килгән кеше һәр ваҡытта ла өйөңә инмәй, ә тышта ғына йомошон йомошлай ҙа китә, әммә һинең хаҡта күтәрмәңә ҡарап фекер йөрөтә, ти торғайны. Хәҙер уның әйткәндәрен уйлап, боронғолар аҡылында ниндәй хәҡиҡәт йәшеренгәнен аңлайһың. Бөгөнгө космик тиҙлек ваҡытында, ысынлап та, күршеңә инеп хәл белеү түгел, хатта йомошоңдо ла кесә телефоны йәки интеренет селтәре аша ғына хәл итәһең дә ҡуяһың. Шуға ла ҡайһы берҙә күтәрмәнде таҙартып йыуыу ихтыяжы юҡ кеүек. Ләкин ололар һүҙе һәр саҡ көн үҙәгендә ҡала һәм ҡала тормошон алып ҡарағанда ла, ул да ошо хәҡиҡәткә буйһона.**

Мәсәлән, әлеге ваҡытта Өфөлә адреслы программаға ярашлы күп фатирлы йорттарҙың ихаталарын һәм уларға үтеү юлдарын капиталь ремонтлау эштәре тулыһынса тиерлек тамаланыу алдында.

Дөйөм алғанда, быйыл 107 йорт ихатаһын төҙөкләндереү (асфальт түшәү, юл полотноһын киңәйтеү, бордюрҙар эшләү) планлаштырылған. Шулай уҡ майҙан иркенлеге мөмкинлек биргән осраҡта, ошо йорттарҙа йәшәүселәрҙең шәхси автомобилдәрен парковкалау урындары ла булдырыласаҡ. Ҡайһы бер ихаталарҙа өҫтәмә рәүештә балалар майҙансығы төҙөләсәк. Ремонт барышында ошо йорттарҙа йәшәүсе граждандарҙың фекере һәм теләктәре иҫәпкә алына һәм улар мотлаҡ эштәрҙе ҡабул итеп алғанда ҡатнаша. Бик йыш ҡына граждандар инвалидтарға артыҡ мәшәҡәт тыуҙырмаҫ өсөн бордюрҙарҙы тәпәшәйтергә йәки автомашиналарҙы парковкаға ҡуйырға уңайлы булһын өсөн үтеү юлын киңәйтеүҙе һорап мөрәжәғәт итә икән.

Был аҙна башына дөйөм күләмдең 99 проценты, йәғни 97 йорт ихатаһында эштәр тамамланған да инде. Бынан тыш, тағы ла 6 ихата аукциондар үткәреү йомғаҡтары буйынса экономияланған аҡса иҫәбенә ремонтланасаҡ. Әлеге ваҡытта шундай дүрт: Рәсәй урамы, 10, Октябрь проспекты, 158, Цюрупа урамы, 100, Элемтә урамы, 1/1 ихата территорияһында эш тамамланған. Ике объектта әлегә эш дауам итә.

Быйыл адреслы программаны тормошҡа ашырыуға республика бюджетынан - 219,4, Өфө ҡала округы бюджетынан 11 миллион һум аҡса бүленгән.

Әлеге ваҡытта 31 балалар майҙансығын урынлаштырыуға муниципаль килешеү төҙөлһә, шуларҙың 13-ө урынлаштырылған, берәүһе тамамланыу алдында тора. Бынан тыш, Иван Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында спорт майҙансығын төҙөү буйынса эштәр башланған.

...Ә бында күтәрмәнең ни ҡыҫылышы бар, тигән һорау тыуманымы башында, хөрмәтле гәзит уҡыусы? Туранан-тура, сөнки ҡала йорттары өсөн уларҙың ихатаһы ошо күтәрмә ролен үтәй ҙә инде. Ихаталарына ҡарап, унда ниндәй кешеләр йәшәүен күҙалларға мөмкин.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# МОСТАЙ ҺЫНЫ...



## һәйкәл булып ҡалкты

**(Башы 1-се биттә).**

Һәйкәл әҙиптең исемен йөрөткән урамдан һәм үҙе оҙаҡ йылдар йәшәгән, ижад иткән йорттан алыҫ түгел урында ҡуйылған. Уның бейеклеге - 6, оҙонлоғо 15 метр. Әҙиптең бронзанан ҡойолған һыны һыу ағып торған гранит нигеҙгә нығытылған. Артҡы фонда - ҡош ҡанаты рәүешендәге скульптура композицияһы. Композицияла шағирҙың үҙ ҡулдары менән яҙылған ҡулъяҙмалары һүрәтләнә. Һәйкәлдең горельефында уның әҫәрҙәрендә күтәрелгән мәңгелек темалар сағылыш таба: йөрәгенән ҡоштар осорған авторҙың күккә олғашҡан торналары, "Ай тотолған төндә"нән саф мөхәббәт символдары Аҡъегет менән Зөбәржәт, Башҡортостан ҡайындары, аттар өйөрө, "Ташлама утты, Прометей!", "Салауат", "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ" һәм башҡа әҫәрҙәре геройҙары.

Монумент янында майҙаны 16 мең квадрат метр булған ҙур ғына сквер йәйелдерелгән. Унда ике фонтан, заманса яҡтыртыу системаһы, сәскә түтәлдәре, йәйәүлеләр өсөн үткәүелдәр төҙөлгән. Майҙанға төрлө төҫтәге гранит һәм плитәләр түшәлгән.

-Мостай Кәрим тере сағында йыш ҡына "Советтар Союзында, донъяла билдәле булып та, үҙ тыуған ереңдә билдәһеҙ булып ҡалырға мөмкин", тип әйтә торғайны. Ҙур ғорурлыҡ менән әйтә алам: шағирҙы Өфөлә беләләр, ул баш ҡаланың почетлы гражданы. Ул был исемдең үҙенә бик ҡиммәтле икәнен һәр саҡ билдәләй торғайны. Өфөләләр хәҙер уның исеме менән атап йөрөтөлгән ошо иң яҡшы скверҙа ял итә аласаҡ. Беҙ бында бар уңайлыҡтар тыуҙырырға тырыштыҡ. Йәш шағирҙар бында килеп, классиктарыбыҙҙы иҫкә алып, уларҙың шиғырҙарын яңғыратасаҡ, тип ышанғы килә, - тине ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәйкәлде асыу тантанаһында.

Халыҡ шағирының монументаль һәйкәленең авторы Мәскәү скульпторы, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Андрей Ковальчукты ла тыңланы йыйылған халыҡ.

-Был заказ хаҡында осраҡлы рәүештә, Өфөгә килгәнемдә белеп ҡалдым, - тине ул.- Мостай Кәримдең ижады менән бер аҙ таныш инем, шуға күрә үҙ көсөмдө һынап ҡарарға булдым. Һөҙөмтәлә тәҡдим ителгән 15 проект араһында тап минең эшем уңышлы тип табылды. Һәйкәлдең проектын ижад итеү өсөн Мостай Кәримдең тиҫтәләрсә китабын уҡып сыҡтым. Миңә бөйөк шәхесте һынландырыу өсөн уның тормош юлын да, ижадын да белеү кәрәк ине. Бер нисә һыҙма яһағайным, балаларына, туғандарына тап ошоноһо оҡшаны...

Ысынлап та, һәйкәл ҡыҙыҡлы ғына килеп сыҡҡан. Ул танылған шағирҙың биографияһы, ижады тураһында байтаҡ мәғлүмәт бирә, уны таныта. Һәр хәлдә, Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Алмас Әмиров әйтеүенсә, был һәйкәл эргәһенә килгән һәр кемдә Мостай Кәримдең китаптарын уҡыу теләге мотлаҡ тыуасаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЭКОЛОГИК АҢ ҮҪӘ

**Баш ҡалала әлеге ваҡытта республикала иғлан ителгән Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы сиктәрендә бер нисә экологик сара тормошҡа ашырыла. Улар араһында, моғайын, иң әһәмиәтлеһе булып тирә-яҡ мөхиткә авария ҡалдыҡтарын сығарыуҙы контролләү системаһы торалыр. Тәү тапҡыр бындай система хаҡында бынан йыл ярым элек һүҙ йөрөтөлә башланып, ул эре сәнәғәт предприятиеларында этаплап тормошҡа ашырылып, бөгөн уның тәүге һөҙөмтәләре хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин.**

Әлеге ваҡытта был система бары тик "Мәскәү - Эфес һыра ҡайнатыу заводы" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең филиалында ғына тулыһынса индерелгән. Тирә-яҡ мөхиткә авария ҡалдыҡтарын сығарыуҙы автоматлаштырылған контролләү системаһы оператив режимда "тәртип" боҙоусы предприятиеларҙы асыҡлау һәм уларға ҡарата тейешле саралар күреү мөмкинлеген бирәсәк. Икенсе яҡтан, предприятиеларҙың бындай системаны үҙ производстволарында булдырыуға әҙерлеге уларҙың экологик аңының үҫеүен раҫлай.

# РӘСӘЙ ТЕЛЕКАНАЛЫ - ӨФӨЛӘ

**"Вся Уфа" телеканалының проекттарын өйрәнеп, ОРТ етәкселеге "Өфө буйлап сәйәхәт" циклынан тапшырыуҙар күрһәтә башланы. Рәсәйҙәр 4 октябрҙә "Ҙур ил" программаһы сиктәрендә беренсе Өфө троллейбусы менән таныштьы.**

Аңлашылыуынса, был телевизор ҡараусыларҙы ҡала тарихы, ҡыҙыҡлы тарихи факттар һәм ҡыҙыҡлы шәхестәр менән таныштырыусы цикл. Проекттың төп маҡсаты булып тиңһеҙ архитектура байлығын, үҙенсәлекле мәҙәниәтте һәм халыҡ йолаларын һаҡлау һәм тергеҙеү тора. Сөнки Өфө - халҡы миллиондан ашҡан һәм һаман үҫеш юлында булған ҡала, ә хәҙерге донъяла үҙ тарихыңды белеү мөһим. "Өфө буйлап сәйәхәт"тә ҡала төрлө аспекттарҙан ҡарала: скверҙар һәм парктар тарихы, билдәле өфөләләрҙең исемен йөрөтөүсе урамдар, билдәле Өфө брендтары, тарихи ваҡиғалар һәм мәҙәни мираҫ.

# ЙӘШ КАДРҘАР... ҺАЙЛАНА

**Өфө ҡалаһының йәш кадрҙары резервына индереү буйынса конкурстың беренсе этабы тамамлана. Конкурс былтырҙан алып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының шәхси патронаты аҫтында үтә. Унда 18 - 30 йәштәге профилле юғары йәки урта профессиональ уҡыу йортон тамамлап, беренсе тапҡыр хеҙмәт эшмәкәрлегенә аяҡ баҫыусы, шулай уҡ сығарылыш курстары студенттары ҡатнаша ала.**

Кадрҙар резервын тулыландырыу туғыҙ йүнәлеш буйынса алып барыла: дизайнер, программист, бухгалтер, логист, психолог, журналист, маркетолог, ҡунаҡхана сервисы һәм туризм белгесе, персонал буйынса менеджер. Конкурс дүрт этапта үтә. Резервҡа индереү йыл һайын декабрь айында тормошҡа ашырыла. Исемлеккә инеүселәр ҡиммәтле бүләктәргә һәм баш ҡала ҡала хакимиәте башлығының төрлө предприятиеларына эшкә йүнәлтмәгә лайыҡ буласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында Әмин урта мәктәбе базаһында билдәле башҡорт ғалимы, геология-минералогия фәндәре докторы, профессор, Башҡортостанда нефть табыуға һәм яңы технологияларға нигеҙ һалыусы Ҡадир Тимерғәзиндың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе уҙҙы.

✓Ошо көндәрҙә Өфөнөң Комсомол һәм Урман техникумы урамдары сатында урынлашасаҡ яңы йөҙөү комплексы нигеҙенә тәүге таш һалдылар. Йөҙөү комплексы 25, 12,5 һәм 12,5 метр оҙонлоғондағы өс бассейндан торасаҡ, шулай уҡ унда дүрт спорт залы һәм фитнес-кафе буласаҡ. Проект буйынса ул тәүлегенә ике меңгә тиклем кеше ҡабул итә аласаҡ. 2015 йылға тиклем Өфөлә тағы "Йүрүҙән" туҡталышы районында, "Машина эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы эргәһендә бассейн төҙөйәсәктәр.

✓Сибайҙа өлкән йәштәге кешеләрҙе ваҡытлыса йәшәтеү өсөн тәғәйенләнгән үҙәк асылды, уны бында "Бабайҙар йорто" тип тә атайҙар. Был йортҡа Сибайҙа йәшәүселәр иртәнән кискә тиклем тотоу өсөн үҙҙәренең ҡарт ата-әсәләрен алып килә. Уларҙы бында биш тапҡыр ашаталар, көноҙонона ниндәйҙер шөғөл өйрәнеүгә йәлеп итәләр. Ата-әсәһен бер көн тотоу өсөн балалары учреждениеға көнөнә 250 һум аҡса түләй. Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан әйтеүҙәренсә, киләсәктә бындай үҙәктәр бар республикала асылырға тейеш.

✓Континенталь хоккей лигаһы чемпионатының сираттағы матчында "Салауат Юлаев" Ярославлдең "Локомотив"ы менән уйнаны һәм 3:1 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

✓Өфөлә "Байтул Мал" фонды һәм Рәсәй мосолмандары Үҙәк Диниә назараты Рәсәй ислам университетының "Бер кирбес хаҡындай изге эш" тип аталған уртаҡ проекты старт алды. Был акция Хакимиә мәсетен төҙөкләндереүгә үҙ өлөшөн индерергә теләүселәрҙең барыһын да саҡыра. Ғибәҙәт йортон төҙөкләндереү эштәре Өфөлә Мостай Кәрим урамы, 11 адресы буйынса бара. Был йорт диуарына үҙ кирбесен һалырға теләгәндәр Рәсәй ислам университетына мөрәжәғәт итә ала. Телефон: (347) 251-97-87.

✓ ***Фильмдарҙа, мультиктарҙа һәм телетапшырыуҙарҙа тәмәке тартыу күренешен, тәмәке изделиеларын күрһәткән өсөн физик шәхестәргә 200 мең һумға тиклем штраф индерергә тәҡдимдәр бар.***



АЛДАЙҘАР!



# ЗАМАНА МАВРОДИЙҘАРЫ

**Башҡортостандың Стәрлетамаҡ ҡалаһында яңы финанс пирамидаһы киң эшмәкәрлек йәйелдергән. Улар хәҙер Өфөлә лә үҙ офистарын аса башлаған. Һис һүҙһеҙ, элекке пирамидаларҙан аҡыл алмаусы граждандар тағы алдаҡ ҡармағына эләгәсәк.**

МММ һәм "Властелин" кеүек классик пирамидалар нигеҙендә буштан килгән килемгә һөйөү ятыуы бер кемгә лә сер түгел. Шуға ла һуңғы ваҡытта ундай төр алдаҡҡа бик ышанып та бармайҙар. Яңы, замана алдаҡсылары хәҙер икенсе төрлө юл һайлаған - улар граждандарға банк кредиттарын ҡаплауҙа ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыуын белдерә. Әгәр тәүге финанс пирамидаларына ышаныусыларға "Үҙең ғәйепле!" тип әйтеү дөрөҫ булһа, икенсе төрө инде тағы ла ауырыраҡ эҙемтәләр менән янай, әммә кредитынды тиҙерәк ҡаплау тураһындағы өмөт осҡоно алдында ымһындырып баҙлап торғанда, муйынынан кредитта ултырған Рәсәй халҡы нисек кенә түҙер икән?

Бөгөн бер яуаплылығы сикләнгән ширҡәт һеҙ алған кредит суммаһына ҡарағанда күпкә кәмерәк суммаға кредитығыҙҙы түләү буйынса хеҙмәтен әүҙем тәҡдим итә. Йәғни, ойошмаға займ алыусы бер тапҡыр бурысының, мәҫәлән, 20-25 процентын түләй ҙә, артабан инде ойошма уның ҡатнашлығынан тыш кредитты үҙе ҡаплап барасаҡ, имеш.

Ошоға бәйле БР Милли банкының рәсми белдереүендә асыҡлап кителә: "Финанс пирамидаһының банк хеҙмәттәрен ҡулланыусыларға - кредит ойошмаһы займсыларына йүнәлеш тотоуы күҙәтелә. Беҙҙенсә, быңдай схема үҙеңә алған бурыстарҙың һуңыраҡ мөрәжәғәт иткән займсыларҙан ингән аҡса иҫәбенә ҡапланыуы "финанс пирамидаһының" аналогы булып тора. Шулай уҡ бындай ойошмаларҙың бигерәк тә социаль селтәрҙәрҙәге агрессив реклама компанияһы һәм офистарының тиҙ артыуы һағайта..."

Яңы пирамиданың мут уйҙары компанияның төп сайтындағы туранан-тура алдауҙан башлана: "Беҙ кредиттарҙы индерелгән түләүҙәр иҫәбенән түгел, ә үҙ аҡсабыҙ иҫәбенә, уларҙы туплау һәм аҡса ағымын ҡабаттан бүлеү иҫәбенә түләйбеҙ". "Бәйләнеш" төркөмдәрендә белдереүҙәрҙең ахмаҡлығы тағы ла асығыраҡ күренә: "Беҙ фонд баҙарын инвестициялайбыҙ". Заманында "Восход" һәм "Инвесткапитал" пирамидаларын ойоштороусылар ҙа "инвестицион килемдең яңы инструменттарын уйлап таптыҡ" тип раҫланы. Уйлап ҡараһаң, граждандарҙың кредитын өлөшләтә генә ҡаплау өсөн дә килем күләме йылына 500-700 процент тәшкил итергә тейеш. Был бөгөн донъяла наркосауҙа алған килемдән дә күберәк булып сыға!

Ә инде "аҡса ағымын туплау", ябайлаштырып әйткәндә, халыҡтан аҡса йыйыуҙы аңлата. Яңы пирамидала бер генә хаҡ һүҙ бар - "ҡабаттан бүлеү". Әммә уның кемдәрҙең араһында икәне генә билдәһеҙ... Алдаҡ классикаһы шуға ҡайтып ҡала: клиенттарҙың беренсе тулҡыны бер нисә ай дауамында бер нәмә тураһында ла уйламай - ысынлап та, кредит буйынса түләүҙәр башҡарыла. Пирамиданың нигеҙе шулай барлыҡҡа килә - мөрәжәғәт итеүселәр һаны геометрик прогрессияла үҫә. Икенсе ағым ошо нигеҙҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә лә инде. Әммә билдәле бер кимәлгә етеүгә пирамида емереләсәк. Был хаҡта клиент банктан кредит түләүҙең туҡтауы һәм тағы бурыс барлыҡҡа килеүе хаҡында иҫкәрмә килгәс кенә беләсәк. Кредитты ваҡытында түләмәүҙең икенсе яғы ла бар - автоматик рәүештә кредит тарихығыҙ боҙоласаҡ... Ә ҡулығыҙҙағы килешеү - ул бары тик бер ниндәй юридик көсө булмаған ҡағыҙ киҫәге генә.

"Эш ваҡытында контролләүсе органдар тарафынан бер нисә тикшереү уҙғарылды. Эшмәкәрлек закон нигеҙендә алып барыла!"- тип асыҡтан-асыҡ алдайҙар белдереүҙә. Был инде граждандарҙың ҡануниәтте белмәүе менән оҫта файҙаланыуға килтерә. Сөнки бурысты түләүҙе кешенең үҙенең ризалығынан тыш өсөнсө яҡҡа рөхсәт итеү - Граждандыҡ кодексының 168-се һәм 391-се статьяларына ярашлы, законһыҙ! Тимәк, беренсе тикшереү үк бик күп ҡанун боҙоуҙарҙы асыҡлар ине, әммә ул әле үткәрелмәгән...

Иғтибар итһәгеҙ, Милли банктың белдереүендә лә, БР-ҙың Кредит ойошмалары ассоциацияһы белдереүендә лә был ойошманың тулы атамаһын яҙмайҙар. Сөнки хоҡуҡ һаҡлау органдарына алданған граждандарҙан берәй булһа ла ғариза килмәй тороп, пирамидаға ҡарата нимәлер эшләү мөмкин түгел. Бурҙы "бур" тип бары тик суд ҡына билдәләй ала, ә шуға тиклем хатта пирамиданың исемен ауыҙ тултырып әйтеүе лә хәүефле - шунда уҡ, законға ярашлы, "намыҫ һәм абруйына бысраҡ ташлаған өсөн..." яуаплылыҡҡа тартылыуҙары ихтимал. Шуға күрә, бында, тәү сиратта, яуаплылыҡ граждандарҙың үҙҙәренең иңендә ята һәм улар һәр төрлө алдауҙарҙан һаҡ, абай булырға тейеш.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КЕМ ҠАЙҘА ЮҒАЛТА?

**Дәүләт Думаһы тәмәке тартыусыларға ҡарата ҡулланылыусы санкциялар тураһындағы законды ҡайтанан ҡараясаҡ.**

Парламентарийҙар йәмәғәт урындарында тәмәке көйрәткән өсөн яуапҡа тарттырыу буйынса законды икенсе уҡыуға кире ҡайтарырға ҡарар итте. Депутаттар фекеренсә, штрафтар күләме бигерәк "йомшаҡ" булған, уны арттырыу мәсьәләһе тора. Был күбеһенсә балалар мәнфәғәтенән сығып эшләнә икән. Мәҫәлән, балиғ булмағандарға тәмәке һатҡан өсөн һатыусыға хәҙер 4 мең түгел, ә 5 меңгә тиклем штраф һалынасаҡ. Вазифалы кешеләргә күберәк эләгәсәк: штрафтар элек ҡаралған 10-15 мең урынына хәҙер - 30-50 мең, ә юридик шәхестәргә 50-70 мең урынына 100-150 меңгә барып төшәсәк. Балалар майҙансыҡтарында көйрәткән өсөн 2-3 мең штраф түләтелә. Бынан тыш, фильмдарҙа, мультиктарҙа һәм телетапшырыуҙарҙа тәмәке тартыу күренешен, тәмәке изделиеларын күрһәткән өсөн физик шәхестәргә 200 мең һумға тиклем штраф индерергә тәҡдимдәр бар. Был, әлбиттә, яңы төшөрөлгән видеопродукцияға ғына ҡағыла. Балиғ булмағандарҙы тәмәке тартыуға йәлеп итеүҙең дә язаһы бар: 2 мең һум штраф.

Штраф санкциялары ошо йылдың 1 ноябренән ғәмәлгә инәсәк, тип көтөлә. Шул уҡ ваҡытта тәмәкегә ҡаршы ошо йылдың 1 июненән үҙ көсөнә ингән закон тирәләй бәхәстәр тынмай әле. Социологтар фекеренсә, офистарҙа тәмәке тартыу урындарын ябыу сәбәпле, кешеләр тышҡа сығып көйрәтергә мәжбүр, ә был үҙ сиратында эш ваҡытын ала. Элек тәмәкеселәр үҙҙәре эшләгән ҡаттағы баҫҡыс майҙансыҡтарында 5-әр минут көйрәткән булһа, хәҙер юғарынан аҫҡа төшөп, урамға сығыу ғына ла байтаҡ ваҡытты ала. Ә әгәр ул ҡайҙандыр 20-се ҡаттан төшһә? Иҡтисади юғалтыуҙар - күҙ алдында. Тартыу урындарын аэропорт һәм тимер юл вокзалдарының транзит зоналарына кире ҡайтарыу тәҡдиме менән "утҡа кәрәсинде" Финанс министрлығы эксперттары ла өҫтәп ебәрҙе: уларҙы ябыу арҡаһында Рәсәй шулай уҡ аҡса юғалта икән дәбаһа! Эш шунда, тип аңлата улар, тәмәкегә ҡаршы закон көсөнә инеү менән Европа һәм Азия пассажирҙары Рәсәйгә инмәй торған икенсе маршруттар һайлай икән, сөнки оҙайлы осоштан һуң башҡа илдәр аэропорттарында рәхәтләнеп никотин һыуһынын ҡандырырға була. Финанс министрлығының был тәҡдимен Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко бик киҫкен кире ҡаҡты һәм уны оятһыҙлыҡ тип атаны. "Әйҙәгеҙ һуң, улай булғас, мәктәп буфеттарында ла балаларға сигарет һатырға рөхсәт бирәйек, килем уғата төшөмлө булыр!" тип төрттөрҙө табип.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары

**Күрем циклы боҙолоуы**

❖ 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған андыҙ тамырын термосҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға. 10-12 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ ҡандала үләнен шулай уҡ ярты литр ҡайнар һыу менән термоста 1-2 сәғәт төнәтергә. Күремде яйға һалыу өсөн көнөнә 2-3 тапҡыр ярты стакан тирәһе эсергә.

❖ 2 грамм кипкән эт ҡарағатын эмаль һауытҡа һалырға, 100 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, бүлмә температураһында һыуытырға, быяла һауытҡа һалып алырға һәм 100 мл ҡайнар һыу өҫтәргә. Ҡараңғы һалҡын урында 2 тәүлектән артыҡ һаҡламаҫҡа. Иртән һәм кисен 1-әр балғалаҡ ҡабул итергә.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған пәйғәмбәр тырнағы (календула) сәскәһен термоста ярты литр һыу менән 2-3 сәғәт төнәткәс, көнөнә 2-3 тапҡыр стакандың дүрттән - бер йәки дүрттән өс өлөшө күләмендә менструаль функцияны яйға һалыу өсөн эсергә. Шулай уҡ уны бала тапҡандан һуң ҡанды туҡтатыу, ялҡынһыныуға ҡаршы ла ҡулланалар.

❖ 1 өлөш - күгүлән, 1 өлөш - ҡырҡбыуын, 3 өлөш - һарыгүҙ, 5 өлөш - ҡаҙ үләнен ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ үләнде 1 стакан ҡайнар һыу менән төнәтергә, 1 сәғәт тоторға. Көн дауамында бәләкәй йотомдар менән эсергә.

❖ 1 өлөш - юл япрағы, 1 өлөш - әрем, 1 өлөш - аир үләне тамыры, 1 өлөш - шалфей, 1 өлөш - аҡ сәскә, 1 өлөш - бөтнөк. 2 ҡалаҡ үләнгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 1 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Ашар алдынан 100 мл-лап ҡабул итергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Осоҡтан им-том

Башҡорт мифологияһында осоҡ - иң яуыз ауырыу эйәһе. Кешегә ул, ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ булып күренә. Төрлө "яман" урындарҙан берәй нәмә алһаң, йығылһаң, артыңдан эйәрә һәм ауырыта. Төрлө райондарҙа осоҡ менән төрлө ауырыуҙарҙы бәйләйҙәр. Мәҫәлән, Бөрйән районында ҡысынманы, Әбйәлил районында быуманы, Ҡариҙелдә ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуын осоҡ эйәреүҙән күрәләр. Ололар һөйләүе буйынса, осоҡтан тейгән ауырыуҙы тик осоҡлау юлы менән генә йүнәлтеп була.

**Ҡурсаҡ ташлау.** Осоҡлау төрлө ерҙәрҙә төрлөсә башҡарыла. Мәҫәлән, Әбйәлил, Белорет, Учалы райондарында осоҡлау өсөн бер йәки ике ҡурсаҡ эшләнә. Шул ҡурсаҡты ауырыуҙың ҡуйынына өс көнгә һалып ҡуялар. Өс көн үткәс, ҡурсаҡты йәки ҡурсаҡтарҙы төрлө сепрәк-сапраҡ, икмәк, көл, (бөтәһе ете предмет) менән бергә биҙрәгә һалалар һәм эңерҙә һыу ағымына йәки соҡор-саҡырға алып барып ташлайҙар. Ҡайтҡанда өс өйгә инеп, урау юлдан ҡайтып инәләр.

**Сепрәк төртөү.** Күгәрсен районында ҡысыу йәки тимрәү сыҡһа, бер сепрәкте, доға уҡып, һыулап алалар ҙа ҡысыуға, һуҙынан ергә төртәләр. Шулай итеп, әгәр беренсе осраҡта ауырыу ҡурсаҡҡа күсерелһә, икенсеһендә ауырыу сепрәккә, унан ергә күсерелә.

**Ҡара тауыҡ име.** Тағы ла бер осоҡлау ысулына туҡталайыҡ. Ғ. Дәүләтшин, Ш.Ғәбдиев яҙмаларында ҡара тауыҡ һуйып осоҡлау тураһында мәғлүмәт бар. Һуйылған тауыҡ менән (ҡайһы бер ерҙәрҙә тере тауыҡ ҡулланыла) ауырыуҙы һыҡҡылайҙар, шунан башынан, биленән өс тапҡыр уратып алалар. Был имдән һуң тауыҡты "Әйҙәгеҙ минең менән, мин һеҙҙе ҡунаҡҡа алып барам", тип бер соҡорға ташлайҙар.

**Ер (тупраҡ) менән имләү.** Кеше йығылһа, ер (тупраҡ) алып осоҡлайҙар. "Ер кендеге, Ер кендеге", - тип әйтеп, тупраҡты тоҙ һыуы менән ергә һалалар. Осоҡ ваҡыты шаршамбы көнө һаналған.

Им-том иткәндә ошо әпсенде әйткәндәр:

*Име-томо шул булһын,*
*Ер менән килһәң, ергә кит,*
*Ел менән килһәң, елгә кит,*
*Осоҡ ауырыуы менән килһәң, осоп кит!*

**Тоҙ, ҡара сәй ташлау.** Осоҡ булһа, ҡояш байығанда имләйҙәр. Бының өсөн тоҙ, ҡара сәй алалар. Шуны өс тапҡыр баштан әйләндереп, юлға сығарып ташлайҙар. Имләгәндә:

*Осоҡ, осоҡ, осоҡ,*
*Ҡайҙан килдең, шунда кит!*
*Урмандағы улаҡҡа,*
*Далалағы сулаҡҡа!-*
тип һамаҡлайҙар.

**Ялыҡҡа ут төртөп имләү.** Ялыҡ ситенә ут төртөп: "Осоҡ, осоҡ!" - тип имләгәндәр. Осоҡлау өсөн һыйырҙар көтөүҙән ҡайтҡан ваҡытты һайлағандар. Осоҡлағанда ҡиблаға ҡарап, ауырыуҙың башынан ялыҡты әйләндереп алғандар.

**Ете төрлө сепрәк яндырып имләү.** Ете төрлө сепрәк алғандар, уны яндырғандар, шуны еҫкәткәндәр, аҙаҡ баш осонан әйләндереп, янған сепрәкте ауырыуҙың үҙенән ташлатҡандар.

**Тауыҡ менән осоҡлау.** Тауыҡты тотоп, тере көйө баш-күҙенән өс тапҡыр әйләндереп, ҡарт әбейгә бирәләр. Ул доға ҡылып алырға тейеш.

**Күлдәк сисеп ташлау.** Күлдәктәрҙе сисеп алып, тауыҡ ҡанына буяп, далаға ташлайҙар. Тауыҡты бер етем әбейгә бирәләр.

**Ҡуй менән осоҡлау.** Ҡуйҙы һуйҙырып, эсендәге ҡарынын йылы көйө: "Эсендәге ауырыуҙы тарт", - тип эскә ябалар. Ауырыу тирләп, йоҡлап китә. Унан ҡарынды әйләндереп, тиҙәге менән билгә лә ябалар.

Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# ЯРАТҠАН КҮҢЕЛДӘ...

## ялған булмай



**"Улыма ун ике йәш. Төҫкә матур ғына малай, иптәштәре лә күп. Яҡшы уҡый, әммә ул минән күп нәмәне йәшерә төҫлө тойола. Яңыраҡ күршебеҙ улымдың ихатала тәмәке тартҡанын күреүен әйткәйне. Минең, тәмәке тартаһыңмы, тигән һорауыма, дорфа ғына итеп: "Юҡ!" - тип яуап бирҙе. Бер тапҡыр ғына күҙемә ҡараны ла, ҡарашын шунда уҡ ситкә төбәне, хатта ултырған урынынан да ҡыбырламаны. Был осраҡта миңә нимә эшләргә? Бәлки, борсолоуҙарым урынһыҙҙыр?"**

Әлимә ВӘЛИЕВА.
Белорет ҡалаһы.

**Гүзәлиә НАЗАРҒОЛОВА, педагог-психолог:** Әсә кешенең балаһының уға дөрөҫөн һөйләүме, юҡмы икәнен белергә тырышыуы яҡшы, әлбиттә. Тик баланың ышаныусын яуларға, уның менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә һеҙ бер аҙ һуңлағанһығыҙ, тип уйламайһығыҙмы? Эйе, психология фәнендә төрлө ысулдар бар, әйтәйек, вербаль булмаған коммуникацияның серле теле арҡамында баланың алдағанын белеп була. Улар арҙамында баланың үҙен, сәләмәтлеген хәүеф аҫтына ҡуйыуын ваҡытында асыҡларға мөмкин. Әммә был турала һөйләшер алдынан бала алдағының тәбиғәте һәм сәбәптәре тураһында бер нисә һүҙ.

Бала үҫешенең бөтөн осоронда ла ялған һәм дөрөҫлөк араһындағы айырманы аңламай. Биш йәшкә тиклем сабый ысын һәм уйлап сығарылған тормош араһындағы айырманы бөтөнләй тоймай. Эйе, ул алдашырға ярамағанлығы тураһында белә, әммә ҡайһы бер осраҡтарҙа дөрөҫ һөйләмәгәнен аңлап етмәй, йәғни, ул алдашам тип алдашмай. Был йәштә бала донъяла төрлө кешеләрҙең бер үк нәмәгә төрлө ҡараш булыуын һәм был ҡараштарҙың йышыраҡ бер-береһенән айырылып тороуын да төшөнөп етмәй.

Биш-алты йәшкә инде балалар дөрөҫ һөйләүҙең ни тиклем мөһим икәнен аңлай. Был йәштә уларҙың үҙенең һүҙе барлыҡҡа килә һәм уларҙың күбеһе: "Бер ҡасан да алдашырға ярамай", - тип әйтәсәк. Ҡайһы берҙә нимәнелер әйтеп еткермәһәләр ҙә, алдашыуҙың насар ғәҙәт икәнен улар белә.

Әммә ун бер-ун ике йәшкә еткәс, баланың ысынға һәм ялғанға ҡарашы бөтөнләй үҙгәрә. Ғалимдар үткәргән бер тикшеренеүҙәр ваҡытында 5-11 йәшлек балаларға: "Алдашыу яҡшымы?" - тигән һорау бирелгән. Биш йәшлек балаларҙың 90 проценты, алдашырға ярамай, тип яуап биргән. Ошо уҡ һорауға ун бер йәшлектәрҙең 90 проценты иһә: "Эйе, ҡайһы берҙә алдашырға мөмкин", - тип яуаплай. Сөнки ун бер йәшлек бала шуны яҡшы аңлай: ялғанлау төрлө була. Әхирәтеңдең күлдәге килешмәһә лә, килешә, тип әйтеү, мәҫәлән, ҙур ғәйеп һаналмай. Улар кемделер "коткарыу өсөн алдашыу"ҙың барлығын да белә. Мәҫәлән, яҡын дуҫы дискотекала йөрөһә лә, дуҫым миндә йоҡланы, тип әйтеүсе үҫмер уны ата-әсәһенең ниндәйҙер яҙаһынан ҡотҡарыу өсөн алдашҡанын яҡшы аңлай. Ысынында иһә, ул дуҫы өсөн үҙенең абруйын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя.

Баланың ялғанлауы бер нисә үҫеш этабын үтеүе һәм мораль ҡатмарлығы менән айырылып тороуын белеү ата-әсә өсөн бик кәрәк. Әммә уның алдашыуын белеп тә, баланы яҙаға тарттырырға йәки уны әрләргә кәрәкмәй. Уның менән ихласлап һөйләшеү, нимә насар, нимә яҡшы икәнлеген аңлатыу күпкә яҡшыраҡ һөҙөмтә бирәсәк. Ә шулай ҙа балаға атай йәки әсәй генә түгел, ә ысын дуҫ була белегеҙ, шул саҡта бер ниндәй проблемалар ҙа килеп тыумаҫ.

Әйҙәгеҙ хәҙер бөгөнгө геройыбыҙға әйләнеп ҡайтайыҡ һәм унайлы булһын өсөн шартлы рәүештә уның исемен Рәмил тип алайыҡ. Баланың алдаймы, юҡмы икәнен уның ҡылыҡтары ла күрһәтә ала, тип башта уҡ әйткәйнек инде. Алдашыуҙың классик билдәһе - кешенең күҙҙәргә бөтөнләй ҡарамауы йәки ҡарашын ситкә алырға тырышыуы. Әсә әйтеүенсә, Рәмил уның күҙҙәренә бер ҡарап ҡына ала. Әңгәмә ваҡытында кешеләр, ҡағыҙ бураҡ, ваҡыттың 60-80 процентында әңгәмәсеһенең күҙҙәренә ҡарай. Әгәр ҙә кеше, киреһенсә, күҙҙәрен күҙҙәрегеҙҙән оҙаҡ алмай икән, шулай уҡ шикләнергә урын бар. Күҙҙәрҙе йәшереү, тимәк, нимәнелер йәшереү, был турала баһыы ла белә, шуға кеше алдашҡанын тоймаһындар өсөн тырышып тороп күҙҙәргә ҡараясаҡ. Яңылышмаҫ өсөн эске тойомлауығыҙға таянығыҙ, әңгәмә ваҡытында үҙегеҙҙе иркен тояслаҡһығыҙ, әңгәмәсегеҙҙең ҡарашы бер ниндәй көсөргәнеш тыуҙырмаҫҡа тейеш. Баш мейеһе вербаль булмаған билдәләрҙе тиҙ "уҡый", шуға ла һеҙгә һөйләшеү эске көсөргәнеш бирә икән, бында шикләнлап та нимәләр бар.

Рәмилдең һөйләшеү ваҡытында ҡыбырламай ултырыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй. Алдашыуҙы өйрәнеүсе психологтар, мәҫәлән, Дэвид Либерман, шулай аңлата: алдашҡан кеше ғәҙәттәгенә ҡарағанда аҙыраҡ хәрәкәтләнә һәм ҡулдарын бөтөнләй тиерлек болғамай. Бала нимәнелер йәшерергә теләй икән, ул үҙенә иғтибарҙы ла аҙыраҡ йүнәлтергә тырышасаҡ. Бында шуныһы ла мөһим: кешенең башҡа саҡта үҙен нисек тотоуын хәтергә төшөрөгеҙ. Тәбиғәте буйынса тыныс һәм яй кешеләр була, шуға ла үҙен тотанаҡлы тотоусыларҙың барыһы ла алдаша, тип уйлау хата фекер. Шуға ла баланың алдашыуын тояһығыҙ икән, уның үҙен тотошонда барлыҡҡа килгән үҙгәрештәргә иң тәү сиратта иғтибар итегеҙ.

Әңгәмәсегеҙ йөҙөнә, ауыҙына ҡулдары менән йыш тейеп алһа, хәрәкәттәре менән сәхнәлә уйнаған кеүек тойолһа, мөмкинлек табып тәҙрәгә, ишеккә боролоп торһа, ул үҙе лә һиҙмәҫтән һеҙҙең эргәнән тиҙерәк китергә тырыша. Устарын аҫҡа ҡаратып тота, әгәр ултырғыста ултыра икән, ҡулдарын аҫтына һалып уҡ ултыра икән, шулай уҡ нимәләр йәшерә. Ҡулдарҙың усын өҫкә ҡаратып тотоу - асыҡлыҡ, дуҫлыҡ билдәһе икәнен беләбеҙ. Был рәүешле беҙ шуны белдерәбеҙ: "Мин һинән бер нәмә лә йәшермәйем, минең күңелем асыҡ". Йәшерелгән устар быныӊ киреһен һөйләй.

Әңгәмәсегеҙ арағыҙға ҡаршылыҡтар ҡора, шулай уҡ "ябыҡ" поза ала. Нимәнелер белдерергә теләмәгән кеше нимәләр йәшергән кеүек тойола. Үҫмер бындай осраҡта һеҙ уны тулыһынса күрмәһен өсөн нимәләр эшләп маташасаҡ - тубығына ҡулдарын йәки мәктәп сумкаһын, яҫтыҡ, уйынсыҡ һ.б. һаласаҡ. Аяҡты аяҡҡа һалып ултырыу, ҡулдарҙы ҡаушырыу, башты эйеү ҙә һеҙгә йәшерен билдә булып торасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Улығыҙ иптәштәре менән мәктәптән ҡайтҡанда тәмәке тартһа ла, алдашҡан саҡта был билдәләрҙең барыһын да күрһәтмәгән, әлбиттә. Вербаль булмаған билдәләрҙе шунда уҡ анализлап булмай, шулай уҡ бер-ике билдә буйынса бала алдаша тигән фекергә килеү ҙә дөрөҫ түгел. Бәлки, бала хатта кире ҡылығы менән булһа ла, үҙенә етмәгән иғтибарҙы яуларға тырышалыр? Һорау алыуҙар ойоштороу, әрләү бында һеҙгә ярҙамға килә алмаясаҡ. Малай кеше өсөн атай, һис булмаһа, олатай, башҡа абруйлы ир туғаны тәрбиәһенең мөһим булыуын да иҫегеҙгә төшөргө килә. Балағыҙҙы яратығыҙ һәм уға ысын дуҫ була белегеҙ - тәрбиә мәсьәләһендә ошонан да яҡшыраҡ кәңәш юҡтыр, моғайын. Бер-береһенән яратҡан кешеләр һәм дуҫтар араһында серҙәр, тимәк, алдашыуға урын юҡ. "Яратҡан күңелдә ялған булмай" ти халыҡ та. Ошоно гел хәтерҙә тотоғоҙ, хөрмәтле ата-әсәләр.**

Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*



**Ошо көндәрҙә Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты үҙенең 225 йыллығын билдәләй. Ул 1788 йылда Рәсәй батшабикәһе Екатерина II указы менән ойошторола. 1936-1950 йылдарҙа Үҙәк Диниә назаратында Ғабдрахман Рәсүлев мөфтөй булып тора. Ул 1881 йылда Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Шәрип ауылында донъяға килә (хәҙерге Учалы районы Шәрип ауылы). Атаһы - билдәле башҡорт дин әһеле, суфый, Нәҡшбәндиә һәм Хәлидиә тәриҡәттәре шәйехе Зәйнулла Рәсүлев ойошторған "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә (Троицк ҡалаһында) белем ала. 1899-1903 йылдарҙа Мысырҙың баш ҡалаһы Ҡаһирәлә урынлашҡан "Әл-Әзхар" университетында уҡый. 1903 йылда Троицкиға ҡайта, "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә ғәрәп телен һәм ислам тарихын уҡыта. 1906 йылда Түбәнге Новгородта үткән III Бөтә Рәсәй мосолмандар съезында дини комиссия ағзаһы булараҡ ҡатнаша. 1917 йылда атаһы мәрхүм булып ҡалғас, уның мәхәлләһен етәкләй. 1923 йылда мөфтөй Ризаитдин Фәхретдин уны Урал өлкәһенең мөхтәсибе итеп тәғәйенләй . Шул уҡ йылда үткәрелгән мосолмандар съезында Ғабдрахман Рәсүлев Ғалимдар шураһы ағзаһы итеп һайлана. Түбәндәге мәҡәләлә Ғабдрахман Рәсүлевтың Үҙәк Диниә назараты мөфтөйө булып эшләгән осоро хаҡында бәйән ителә.**

# ҒАБДРАХМАН РӘСҮЛЕВТЫҢ...

## Диниә назаратын һаҡлап ҡалғаны

Мөфтөй вазифаһын башҡарған Ризаитдин Фәхретдин 1936 йылда вафат булғас, Үҙәк Диниә назаратында мөхтәсиб имамдары менән йыйылыш үткәрелә. Йыйылышты Башҡорт АССР-ы хакимиәте ойоштора, унан ике вәкил ҡатнаша. Диниә назаратының артабанғы яҙмышы тураһында фекер алышыу йыйылыштың төп маҡсаты була. Унда Ғабдрахман Рәсүлев менән бергә тағы ете мөхтәсиб ҡатнаша. Мөхтәсибтәрҙең һәр береһенә "Диниә назараты кәрәкме, әллә уны ябырғамы?" тигән һорау бирелә. Алты дин әһеле "Власть нисек хәл итә, шулай буласаҡ", тип яуап ҡайтара. Сират шәйех улына килеп етә. Уның яуабы шулай була: "Урыҫ батшабикәһе Диниә назаратын кәрәккән өсөн асҡан. Ә һеҙ уны кәрәкмәй тип ябырға уйлайһығыҙ. Ә бит биш йылдан ул һеҙгә лә кәрәк буласаҡ, ләкин эште яңынан ойоштороу ғына ҡыйын буласаҡ. Сөнки уны ойошторор кешеләр ҙә булмаясаҡ", - тип яуаплай. Ғабдрахман Рәсүлевтың ҡыйыулығы власть кешеләрен аптырата ла, һағайта ла. Яҡынданыраҡ танышыу өсөн уға төрлө һорауҙар яуҙыралар. Ишан барыһын да һөйләп бирә. Шул саҡта власть кешеләренең береһе: "Ярай, ул саҡта һин мөфтөй булып эшлә һәм Диниә назаратын һаҡлап ҡалырға тырыш", - ти, шунан башҡа мөхтәсибтәргә боролоп: "Үҙәк Диниә назараты эшләйәсәк. Үҙегеҙҙең ҡалаларығыҙға ҡайтығыҙ һәм хеҙмәтегеҙҙе дауам итегеҙ",- тип бойора. Был власть кешеһе Афзал Таһиров булып сыға (Афзал Таһиров һуңынан да мөфтөйҙөң тормошо хаҡында ҡыҙыҡһынып тора, ғаиләһенә ярҙам итә. Бәлки, 1937 йылда репрессияға эләгеүенең сәбәптәренең береһе Диниә назаратына, мөфтөйгә мөнәсәбәте булалыр. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас үткәрелгән мосолмандар съезында Ғабдрахман Рәсүлев дин ҡәрҙәштәрен, совет власы ҡыҫырыҡлаһа ла, Үҙәк Диниә назаратын ябырға юл ҡуймаған Афзал Таһировты хөрмәт һәм яҡшы һүҙ менән иҫкә алырға саҡыра).

Зәйнулла Рәсүлевтың улы Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назаратына мөфтөй булып киләсәк, тигән хәбәр Советтар Союзы мосолмандары араһында тиҙ тарала. Ғабдрахман Рәсүлев был осорҙа дуҫтарынан, туғандарынан, таныш булмаған кешеләрҙән бик күп ҡотлау, рәхмәт хаттары ала. Бик ҡатмарлы осор була был. Ризаитдин Фәхретдинов үлгәндән һуң бер нисә ай үткәс, Үҙәк Диниә назаратын дәүләткә ҡаршы заговор әҙерләүҙә ғәйепләйҙәр. Бик күп кешеләр ҡулға алына, ҡайһы берәүҙәре үлем язаһына тарттырыла. Яңы мөфтөйҙө лә ҡолас йәйеп ҡаршы алмайҙар. Репрессияларҙан һуң "яңырған" урындағы хөкүмәт көндән-көн баҫымын көсәйтә. Мөфтиәттең ике ҡатлы бинаһынан дөйөм ятаҡ эшләп, назаратты бәләкәй генә бер ҡатлы фатирға күсерәләр. Архив дәүләт ҡарамағына тартып алына. Унда булған мөһим документтар, китаптар юҡҡа сығыу ҡурҡынысы аҫтында ҡала. Властар үҙәк архивты юҡ итеп, ундағы документтарҙы башҡа төбәктәргә ебәрергә планлаштыра. Ғабдрахман Рәсүлев 150 йыл буйы йыйылған материалдарҙы һаҡлап ҡалыуға бар көсөн һала. Тәүҙә Башҡортостан Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итә. Унда аңлау тапмағас, Мәскәүгә Диндәр буйынса совет рәйесе Полынский менән осрашыуға юллана. Моратына ирешмәй: был хөкүмәт эше, ул нимә теләй, шуны эшләй, тигән яуап ала. Ғабдрахман Рәсүлевтың шәхси архивы ла була. Архив Зәйнулла Рәсүлевтың биографияһы, юл яҙмалары, "Рәсүлиә" мәҙрәсәһенең тарихы, башҡорттар менән ҡаҙаҡтарҙың тарихынан тора. Һуңғыһын ғаилә ағзалары йәшереп тота. Сөнки яҙмаларҙа башҡорт менән ҡаҙаҡ халҡының ырыуҙары, көнкүреше, йолалары менән бергә, урыҫтарҙың уларҙы ҡыҫыуы, йәш совет власы тарафынан кәмһетелеүҙәр, ихтилалдар етәкселәре, язаға тарттырылыусылар хаҡында мәғлүмәттәр ҙә була. Башҡорт тарихы тураһындағы хеҙмәтен ул шул ваҡытта йәшәгән йәш бер тарихсыға тапшыра (яҙҙыра), ҡаҙаҡ тарихы тураһындағы эше күп йылдар үткәс Ҡаҙағстан ғалимдары тарафынан өйрәнелә.

Һуғышҡа тиклем Советтар Союзында бер генә мосолман уҡыу йорто ла эшләмәй. Мәсеттәрҙең һаны бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡала. Уларҙың күпселеге мәҙәниәт йорттарына әйләндерелә, икенселәре ҡулланып булмаҫ хәлгә килтерелә. Мосолман зыялыларының, дин әһелдәренең күпселеге репрессияға эләгә, лагерҙарға ебәрелә. Иҫән ҡалғандары иһә, ғибәҙәттәрен йәшерен рәүештә башҡара. Күп тарихсылар билдәләүенсә, 1920-1930 йылдарҙа үткәрелгән дингә ҡаршы кампания сәйәси күҙлектән сығып эшләнә. Большевиктарҙың төп бурысы халыҡ аңынан коммунизмға альтернатив булған идеяларҙы ҡыуып сығарыу була. Дин был исемлектә беренсе урынды алып тора. Ул ваҡыттағы ярһыу большевиктар бер аҙҙан диндең халыҡты тышҡы дошманға ҡаршы мобилләштереүҙә әйтеп бөткөһөҙ ҙур роль уйнаясағын күҙ алдына ла килтерә алмағандыр. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ғына дингә ҡараш бер аҙ йомшара.

Мөфтөйҙөң һүҙҙәре дөрөҫкә сыға. Үҙәк Диниә назаратын ябыу хаҡында мәсьәлә күтәрелгәндән һуң биш йыл үткәс, дәүләттең дини органдарға ихтыяжы тыуа. 1941 йылда башланған Бөйөк Ватан һуғышы ил етәкселеген дин әһелдәренә мөрәжәғәт итергә мәжбүр итә. "1941 йылдың август айында беҙҙең өйгә Башҡорт АССР хөкүмәте рәйесе килде. Улар атайым менән оҙаҡ ҡына аралаштылар. Ҡунаҡ Совет власының ислам диненә ирек биреүен, дини ойошмаларҙың эшмәкәрлеген ҡыҫыраҡламаясағын, элек ябылған мәсеттәрҙең ҡабаттан асыласағын әйтте. Ошоноң менән Үҙәк Диниә назаратының эшмәкәрлегенең яңы этабы башланды. Совет хөкүмәте өсөн кәрәкмәгән ойошманан ул файҙалы үҙәккә әйләнде", - тип иҫкә ала мөфтөйҙөң ҡыҙы Сафуат Ғабдрахман ҡыҙы Рахманҡулова.

Был осрашыуҙан һуң Ғабдрахман Рәсүлев Үҙәк Диниә назараты исеменән мосолмандарға мөрәжәғәтнамә яҙа. Мөрәжәғәттә Совет власының динде башҡаса ҡыҫмаясағы, мәсеттәр тергеҙеләсәге, уларҙа лайыҡлы имамдар хеҙмәт итәсәге, мосолмандар ҡурҡмайынса дини йолаларҙы, ғибәҙәттәрҙе үтәй аласағы тураһында әйтелә. "Әлеге ваҡытта ҡурҡыныс һуғыш бара. Беҙҙең Ватаныбыҙ, ғаиләләребеҙ ҡурҡыныс аҫтында. Беҙ, Советтар Союзы мосолмандары, Ҡыҙыл Армияға, бәләгә тарығандарға, ҡасаҡтарға ярҙам итер өсөн бар көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ. Һәр мосолман был эшкә хеҙмәте һәм аҡсалата ярҙамы менән үҙ өлөшөн индерәсәк", тип мөрәжәғәт итә Ғабрахман Рәсүлев дин ҡәрҙәштәренә. Мөрәжәғәт башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә баҫтырылып, төрлө ҡалаларға ебәрелә. Мәсеттәрҙә, завод цехтарында, ҡала йыйылыштарында уҡыла. Фронтҡа ярҙам эшенә мосолмандар әүҙем ҡушыла. Улар, төрлө төбәктәрҙә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, банктарға түләүҙәр индерә һәм квитанцияларҙы Үҙәк Диниә назаратына ебәрә башлай. Квитанцияларға күҙәтеү алып барған Башҡорт хөкүмәте иғәнәләрҙең күплегенә хайран ҡала.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Һике өҫтөндә, йортта йәки ергә ултырып ашар алдынан, әгәр һыйлау тирмә эсендә булһа, кейеҙ өҫтөнә ашъяулыҡ йәйелә. Хужа йәки уның оло улы ҡомған һәм тас тотоп, ҡунаҡтарҙың ҡулын йыуҙырып сыға. Һуңынан ҡунаҡтар бишбармаҡ һалынған ҙур ағас һауыттар тирәләй теҙелеп ултыра. Бишбармаҡлы һауыттарҙа, әгәр улар бер нисә булһа, һарыҡ итенән, майҙан һәм һалманан тыш, бер нисә ҙур киҫәк ит йәки ҡаҙы ята. Ҡунаҡтарҙың береһе, ҡулына бысаҡ алып, итте киҫәктәргә турай, ә икенсеһе итте һәм ҡаҙы киҫәктәрен ҡунаҡтарға тарата. Ризыҡ ейеү ваҡытында байрам итеүселәр иң тәмле, иң яҡшы, иң майлы киҫәктәрҙе эргәһендәге йәки үҙе хөрмәт күрһәткән кешеһенең ауыҙына ҡаптырған. Ваҡыты-ваҡыты менән табынға тамашасыларҙың йәки балаларҙың берәйһе саҡырылған һәм һыйларға теләүсе "һоғон" тип, уға ит һоғондорған. Хужа, ғәҙәттә, табында ултырмаған, ҡунаҡтарҙы һыйлауҙы хәстәрләгән. Ниһайәт, бишбармаҡ ашалып бөтөп, һауыттар алына. Хужа ҡорот һалынған һурпалы туҫтаҡтан башта үҙе ауыҙ иткәс, уны ҡунаҡтарҙың береһенә, ғәҙәттә, иң абруйлыһына бирә. Ул, туҫтаҡтағы һурпанан ауыҙ иткәс, уны күршеһенә тапшыра. Шулай итеп, һурпалы туҫтаҡ табынды урап сыға. Ашҡа доға ҡылынғас, барыһы ла тороп, ҡабат ҡулдарын йыуа һәм уңайлыраҡ ултырып, ҡымыҙ йәки сәй эсә башлай.

**Ҡаҙы** - йылҡы ҡаҙыһынан эшләнгән өй "колбасаһы", тәмле һәм абруйлы ризыҡтарҙың береһе. Ҡаҙы бишбармаҡ эсенә лә һалынған, айырым да ашалған. Ул йылҡы эсәгенә майлы ит тултырып әҙерләнә һәм ҡояшта ҡаҡлана, ҡулланыу алдынан бешерелә.

Бер ни тиклем һуңыраҡ башҡорттарҙа **сүспәрә** һәм **бәлеш** барлыҡҡа килә. Әммә уларҙы башҡорт халҡының милли ризығы тип атарға яраймы икән? Сүспәрә - һыуҙа бешкән итле билмәндәрҙең бер төрө, ә бәлеш - һарыҡ итенә һуған, һарымһаҡ ҡушып ҡыҙҙырылған эслек һалынған ҡамыр ризығы. Ғәҙәттә, ул бай башҡорттарҙың ашамлығы тип һаналған.

Иҫерткес эсемлектәрҙән башҡорттарҙа **әсе бал** һәм **буҙа** булған. Әсе бал - көслө эсемлек. Уны әҙерләү өсөн 2-3 килограмм кәрәҙле балды эҫе һыуҙа болғағандар һәм бер тәүлеккә сүпрә йәки шыйыҡ ҡамырҙа ебетелгән арпа ҡушып ултыртҡандар. Сүпрә әҙерләү өсөн башҡорттар элек ҡомалаҡ ҡулланған. XVII - XVIII быуаттарҙағы барлыҡ яҙмаларҙа ла тиерлек аҫаба ерҙәргә припущенниктарҙы индергәндә уларҙың да ҡомалаҡ йыйыу хоҡуғы булыуы теркәлә. Ҡомалаҡ, күрәһең, килем сығанағының береһе булып торған һәм уны һатҡандар ҙа. Әммә ҡайһы бер яҙмаларҙа, хатта аҫаба ерҙәргә икенсе олоҫ башҡорттары индерелгәндә лә, ҡомалаҡты бары тик үҙ мәнфәғәтең өсөн генә йыйырға рөхсәт ителгән. Ҡайһы бер урындарҙа баллы һыуҙы бер ни тиклем шытҡан арпа йәки тары менән әсеткәндәр. Әсегән балды бер нисә көнгә йылы урынға ҡуйғандар. Эсеү өсөн ул әсеүенең икенсе көнөнә үк әҙер булған, әммә өс көндән һуң тейешле ҡеүәткә еткән.

ХӘТЕРКИТАП

**Сибай ҡалаһына юл төшкәс, күптән ишетеп белгән 84 йәшлек ил инәһе Үлмәсбикә Бәғәҙәт ҡыҙы Ҡәҙерғолова-Ғафарованы күреп китеү мөмкинлеген эҙләнем. Заманында изге әүлиәбеҙ Мөжәүир хәҙрәт үҙе яҡын күргән инәй менән аралашыу теләге бушҡа булмаған икән: ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында әллә күпме фәһемле фекер ишеттем, ҡыҙыҡлы иҫтәлектәр солғанышында инәйҙең ғүмер юлдарын байҡаным. Йор һүҙле, сәсән телле, ғәләмәт мәрәкәсел әңгәмәсем менән хатта хушлашҡы ла килмәй ине. Уның ыҡсым ғына фатирында урын алған һәр әйберҙән, гүйә, илаһи нур бөркөлә: нәзәкәтле итеп үҙе теккән милли кейемдәрҙән дә, олуғ әүлиә Мөжәүир хәҙрәт үҙ ҡулдары менән яҙып биргән изге доғаларҙан да һәм хатта әле өлтөрәп йөрөп сәй әҙерләгән, әле ниндәйҙер бер ҡыҙыҡ ваҡиғаны иҫенә төшөрөп сыңғырҙатып көлөп ебәргән, берсә теләк-фатихаларын әйтеп арҡамдан тупылдатып һөйөп алған Үлмәсбикә инәйҙең оҫҡон сәсеп торған күҙҙәренән дә... Ә мин бит хатта ул оҫҡонло күҙҙәрҙең һуңғы йылдарҙа күреү һәләтен юғалтҡанын да абайламағанмын! Үлмәсбикә инәй үҙе лә был турала тәүҙә ләм-мим өндәшмәне, зарланманы. Хушлашыр саҡта ғына: "Ҡартайған көнөмдә Хоҙай биргән оло һынау ул. Мин уны риза ғына булып ҡабул итәм," - тине. Ошо көслө рухлы, сабыр йәнле, матур иманлы ағинәйебеҙҙең уй-фекерҙәрен тиҙерәк аҡ ҡағыҙ биттәренә күсереп, һеҙҙең иғтибарығыҙға ла еткергем килде.**

# ҮЛМӘҪБИКӘ ИНӘЙ ХӘСИӘТЕ

### Бала саҡ хәтирәләре

Мин Баймаҡ районының Таһир ауылында донъяға килгәнмен. Колхозлашыу осоро башланғас, атайым менән әсәйемде ике балаһы менән йортобоҙҙан ҡыуып сығарып, унда колхоздың ағыулыҡ материалдарын тултырғандар. Бала ғына килеш ошо май һеңеп бөткән нигеҙ эргәһенә килеп: "Мин барыбер бирешмәйәсәкмен. Ни күрһәм дә бирешмәйәсәкмен!" - тип сеңләп илағанымды хәтерләйем...

Һуғыш осоронда мине, мәктәп уҡыусыһын, хат таратыусы итеп ҡуйҙылар. Был эштә бер кемдең дә эшләгеһе килмәне, сөнки көнөнә икешәр, өсәр "ҡара ҡағыҙ" ташыу еңелдән түгел ине. "Ҡара ҡағыҙ" менән бергә өйҙәргә ҡайғы килтереүҙә минең бер ғәйебем булмаһа ла, атаһын, ағаһын, улын юғалтҡандар минә ҡырын ҡараны. "Эйе, һинең атайың үлмәгән бит, эстән шатланып торалһыңдыр әле!" тип тә әйтә торғайнылар хатта. Йәше арҡаһында атайымды фронтҡа алмағайнылар шул, әммә тылда ҡалғандарға ла еңелдән булманы бит.

Ауылдаштарҙың хат ташыусыға ошондай мөнәсәбәте мине 16 йәшемдә, атай-әсәйемә лә әйтмәйенсә, өйҙән ҡасып китергә мәжбүр итте. Бер урыҫ ауылында мине икенсе ғаилә үҙенә һыйындырҙы. Үтә һалҡын көҙ булды ул йылы. Ауыл халҡы картуф ҡаҙып һәм һарыҡтарҙың йөнөн ҡырҡып көн күрә. Был эшкә мин дә ҡушылдым. Йә бер өйгә, йә икенсе өйгә ялланып эшләй торғас, эш хаҡы өсөн хәтһеҙ генә картуф менән йөн йыйылып китте. Бер ваҡыт хужа, ҡарт ҡына кеше, Магниттан ҡайтып килеүсе ылаусылар аша атайыма, ҡыҙы йыйған йөн менән картуфтарҙы килеп алһын, тип хәбәр ебәргән. Өс көн үткәс, атайым мине килеп алды. Туплаған байлығымды атыбыҙ саҡ һөйрәп алып ҡайтты.

Был тормоштоң һикәлтәле ауыр юлдарын үтеү өсөн ғәйәт оло сабырлыҡ кәрәк. "Сабыр иткән - мораҙына еткән" тип ололар юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Мин һәр төрлө ауырлыҡтарға, кәмселектәргә дусар булғанда атайым әйтә торғайны: "Аңламаһаң да аңларға тырыш, көсөң етмәгән эшкә ынтыл, тырыш, тәүәккәл бул, балам! Бөгөнгө әсенеп илауың, эшләгән эшең, күргән ауырлыҡтарың барыһы ла киләсәк бәхетең өсөн булыр!" Барыһы ла шулай килеп сыҡты ла. Беҙҙең быуын балалары өлкәндәрҙең һүҙен тыңлап, уларҙың фекерен ишетеп, фәһем алып, сәмле булып үҫте. Хәлебеҙҙән килһә лә, килмәһә лә, ололар менән тигеҙ эшләнек. Белорет яҡтарында урман ҡырҡып, 2 метрлы ҡарағай бысыу, уларҙы әрҙәнәгә һалыу, тәрән көрткә бата-сума ҡарағай тубырсыҡтары йыйып, урмансыларға тапшырыу, һуғыш майҙандары өсөн түмәр ярып утын әҙерләү - быларҙың барыһы ла төнгө йоҡо иҫәбенә эшләнә ине. Йәйгеһен бесән сабып, кәбәнгә һалып, уны тарттырып кәбән ҡоя инек. Һәр кемгә: олоһона ла, кесеһенә лә 90-шар кәбә бесән сабып өйөү мотлаҡ ине. Уны тапшырмай тороп, халыҡ үҙенең малына ла аҙыҡ йүнләй алманы. 1944 йылдан алып һәр өйҙә иҫәпле генә булған мал-тыуарҙан һәр ғаилә үҙенә бирелгән норманы хөкүмәткә тапшырырға бурыслы ине. Итен, һөтөн, йомортҡаһын балаларының ауыҙынан өҙөп, хөкүмәткә тапшырған ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәштәре йылға булып аҡты инде. Аҙнаның бер көнөндә һарына, әптек, ҡуҙғалаҡ, балтырған йыйып, унан ашарға бешереп ашау беҙҙең өсөн оло байрам булды. Аслыҡты ла, ялангаслыҡты ла, етешһеҙлекте лә күрҙе беҙҙең быуын...

### Ғаиләм - ҡәлғәм

1948 йылда минә 19 йәш тулғайны. Беҙҙе совхоз ырҙынына эшкә ебәрҙеләр. Шунда тормошома килеп инде Әсхәт



исемле шымтыҡ егет. Ул да баҫыуҙа эшләне, саҡ ҡына буш ваҡыты килеп сыҡһа, ырҙынға мине күрергә килеп етә торғайны. Бер көндө Әсхәт беҙ йәшәгән фатир хужабикәһенә: "Ҡыҙығыҙҙы урлап алып ҡайтам!" - тип әйтеп киткән. Күп тә үтмәне, ул был ниәтен тормошҡа ашырҙы. Шулай йәшәп алып киттек. Тик йөрәк аҫтында балаһын йөрөтһәм дә, уны яҡын итә алманым. Түҙмәнем, ҡастым мин был өйҙән. Арып-талып, атай йортона ҡайтып йығылдым. Оҙаҡ та үтмәне, ҡыҙым тыуҙы.

Икенсе тапҡыра яҙмышымды үҙемдең класташым менән бәйләнем. Әммә һаулығы ла хөрт булғанғамы, йәненә тынысыҡ тапмайынсамы, улыбыҙ тыуғас ҡына үҙ-үҙенә ҡул һалып, яҡты донъя менән хушлашты...

Хәҙер бына йәш килендәргә кәңәш уҡыйым, түҙемле булығыҙ, тегеләй-былай һикерендәп йөрөмәгеҙ, ирҙәрегеҙҙе әрләмәгеҙ, ғаилә усағын һүндермәгеҙ, тием. Абсолют бәхетле ҡатын-ҡыҙ булмаған кеүек, ҡатын-ҡыҙ бәхетенең теүәл генә рецепты ла юҡ. Мин, мәҫәлән, үҙемдең намыҫлы, ихтирамлы балаларым һәм ейәндәрем булыуы менән бәхетлемен. Уларҙың барыһына ла бәхет теләйем. Ҡыҙыма бөгөн 60 йәш, ике ҡыҙ үҫтереп, 7 балаға өләсәй булып ултыра. 54 йәшлек Ғәбдинур улымдың да ике ҡыҙы, бер улы булды, уның да 9 йәшлек ейәне бар. Балаларымдың үҙ ғаиләләре менән татыу, бәхетле йәшәүҙәренә ҡыуанып бөтә алмайым.

### Һикәлтәле тормош юлдары

Үҙ ғүмеремдә ниндәй генә һөнәр эйәһе булырға тура килмәне минә: почтальон, һауынсы, типография эшсеһе, һатыусы, тегенсе, склад мөдире, юл мастеры, ашнаҡсы, штукатур-маляр. Һунынан медучилищеге комендант итеп саҡырҙылар. Яҡшы кешеләр араһында йәшәүем аҡыл, фәһем алып, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорорға өйрәтте.

> ***Был тормоштоң һикәлтәле ауыр юлдарын үтеү өсөн ғәйәт оло сабырлыҡ кәрәк. "Сабыр иткән - мораҙына еткән" тип ололар юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Мин һәр төрлө ауырлыҡтарға, кәмселектәргә дусар булғанда атайым әйтә торғайны: "Аңламаһаң да аңларға тырыш, көсөң етмәгән эшкә ынтыл, тырыш, тәүәккәл бул, балам! Бөгөнгө әсенеп илауың, эшләгән эшең, күргән ауырлыҡтарың барыһы ла киләсәк бәхетең өсөн булыр!" Барыһы ла шулай килеп сыҡты ла. Беҙҙең быуын балалары өлкәндәрҙең һүҙен тыңлап, уларҙың фекерен ишетеп, фәһем алып, сәмле булып үҫте. Хәлебеҙҙән килһә лә, килмәһә лә, ололар менән тигеҙ эшләнек.***

Ун ике йәштәр самаһы ине минә. Бер мәл баҫыуҙа сөгөлдөр утап йөрөй инек, йыраҡтан йөҙгән кеүек кенә итеп дәү аҡ шар тәгәрәп килгәнен күрҙем. Үҙе ялтыр ғына, һур сәсеп торған кеүек. Тәгәрәп килде лә, ҡарсыҡ рәүешенә инеп, Билалдағы өләсәйемдәрҙең йортона инеп тә китте. Был инәй хәҙер беҙгә лә килә, тип уйлап, тиҙ генә йүгереп өйгә ҡайттым. Ул инәйгә шул тиклем сәй эсергем килгәйне. Бер аҙҙан ысынлап та инәй беҙгә килеп инде. "Ҡыҙым, мине әллә ҡайҙан күреп көтөп алдың, мин дә һине күптән күрергә теләй инем", тине. "Мин зиндандан ҡайтып барам, һеҙҙең бер ҙә тотонолмаған ҡара кейеҙегеҙ бар икән, шуны алып түшә әле, мин ултырайым", - ти. Беҙҙә шундай кейеҙ барлығын ҡайҙан белә икән, тип аптырап, уны ҡаралдылар араһынан эҙләп алдым да, урындыҡҡа түшәнем. Өйөбөҙҙә гел генә бер аҡ йылан йөрөй торғайны, шул урындыҡ аҫтынан сығып, инәйҙең аяғын тешләп алмаһын, тип, кейеҙҙе иҙәнгә төшөрөбөрәк йәйеп ҡуйҙым. Был инәйҙең Мөжәүир хәҙрәт булғанын һуңынан ғына белдем. Бер барғанымда: "Һин мине һаман танымайһың. Үҙең мине ҡара кейеҙгә ултыртҡайның. Был инәйҙең күҙен дауаларға кәрәк!" - тип уйланып торғайның", - тине. Мин ысынлап та инәйҙең күҙендә шаршауын күреп, ниңә дауаханаға бармай икән, тип уйлап ҡуйғайным. Быны шул тәүге тапҡыр күрешеүебеҙҙә инәй һыныңдағы хәҙрәт минең барлыҡ киләсәгемде әйтеп бирҙе. Артабан бар тормошом ул әйткәнсә барҙы. "Аллаһы Тәғәлә һинә иркенлек биргән. Барыһын да үҙең эшләп табасаҡһың. Ир икмәге ашай торған кеше түгел һин", - тигәйне, шулай булды ла. Ике баламдың да аҙан менән, Мәрйәм һәм Мөхәммәт исемле булып тыуасағын да әйткәйне. "Балаларыңдың исемдәре алтын япраҡҡа алдан яҙылып ҡуйылған, онотма", тип иҫкәрткәйне. Тик мин ул исемдәрҙең яуаплылығын күтәреүе ауыр булыр, тип, балалаларыма был исемдәрҙе ҡуштырманым. "Ғүмер буйы ҡарышмаҡ булдың", тип әрләне аҙаҡ хәҙрәт.

Хәҙрәт олатай менән күп тапҡырҙар осрашырға тура килде. Килмәйерәк торһам, кеше аша әйттереп саҡыртып алыр ине. "Ҡыҙым, табындарҙа ла, мәжлестәрҙә лә мине иҫкә төшөрөп һөйлә. Иҫегеҙгә генә төшөрөп алһағыҙ ҙа, барыһына фатихалы булырмын", - тиер ине. Яҙыусы Лира Яҡшыбаеваның Мөжәүир хәҙрәтебеҙ тураһында китабы баҫылғас, мин атҡара алмаған эште атҡарып ҡуйғанһың, тип, эй ҡыуандым инде. Олатайҙың аманатын үтәгән өсөн рәхмәт уға! Минең ҡайһы бер иҫтәлектәр ҙә инеп киткән ул китапҡа.

### Аллаһу Тәғәләгә һыйынып...

Инде артҡа ҡарап, үткән ғүмер юлдарыма, йылдарыма хайран ҡалып уйланып, һәр бер атҡан таңыма, килгәнкиткән көндәремә шөкөр ҡылып, Аллама һыйынып ҡына йәшәп ятыуым. Әҙәм балаһы ергә үҙ тәҡдире маңлайына яҙылып, үҙ яҙмышы менән тыуа, тип дөрөҫ әйтелгән. Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тигәндәй, күрәһеңде күрмәй гүргә кереп булмай.

Үҫмер генә сағымда бер кемгә әйтмәй, кәңәш итмәйенсә, баҙнат итеп ауылымдан сығып китеүемде уйлап, хәҙер үҙем дә ғәжәпләнеп ҡуям. Хатта атайым менән әсәйем минең өнһөҙ-сәбәпһеҙ сығып китеүемде нисек кисергәндәр, тигән уйҙан, бөгөн, олоғайған көнөмдә, уңайһыҙланып, оло борсолоу кисерәм. Хәҙерге ваҡытта улар урынына үҙемде ҡуйып ҡарайым да, үҙемдең ғәйепле икәнемде аңлайым. Үҙем бит хатта ейән-ейәнсәр, бүләсәрҙәремде 2-3 сәғәт күрмәһәм дә, һағынып, йөрәгем һыҙлып, әсе күҙ йәштәремде түгә башлайым.

1978 йылдан Ҡөрьән-Кәримде өйрәнә башланым, хәҙергәсә динемә лә, көнөмә лә риза булып йәшәйем. Һәр атҡан таң, һәр көн изге хәбәрҙәре, хәйерле эштәре менән килһен, тип теләк теләйем. Урлашып, кешене алдап, кәмһетеп йәшәмәһәң, кешеләр араһында хөсәт таратмаһаң, Аллаһы Тәғәлә һинән риза булып, рәхмәтен яуҙыра. Мине мисәүләп килгән уң яҡ фәрештәмә лә, һул яҡ фәрештәмә лә рәхмәтем ҙур. Аллаһы Тәғәләгә аяҡ баҫҡан һайын шөкөр ҡылам. Тормош бирәүҙең дә башынан һыйпап ҡуймай, ә шулай ҙа айырма бар, йырҙа әйтелгәнсә:

*"Бәндәләрҙән бәндә һис кәм түгел,*
*Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел…"*

**Зөлфиә ХАННАНОВА**
**яҙып алды.**

ИЖАДХАНА

**Ысын ҡурайсы булыу өсөн ҡурайҙа уйнай белеү генә әҙ, тиҙәр. Ҡурай - ул музыка ҡоралы ғына түгел, ул башҡорт халҡының асылы, уның изге ҡомартҡыһы, ул - ата-бабаларыбыҙ тауышы. Ҡурайсыла халыҡтың күңеле лә, аҡылы ла берҙәй тупланырға, ә ул үҙе рухи яҡтан өлгөрөп еткән булырға тейеш. "Ижадхана"ның бөгөнгө ҡунағын, һис шикләнмәйенсә, ошондай ҡурайсылар рәтенә индерергә була. Быйыл йәй Йылайыр районында үткән Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған Республика башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусылар конкурсында Гран-при яулаусы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты профессоры Нурғәли Мирғәле улы ҠАЙЫҠБИРҘИН менән әңгәмәбеҙ ҡурай сәнғәтенең бөгөнгөһө һәм киләсәге, төрлө бәйгеләрҙең ҡурайсылар үҫешенә յһаған йоғонтоһо тураһында булыр.**

# БӘЙГЕЛӘРҘӘ БИЛ НЫҒЫТА...

## үҙе лә, уҡыусылары ла

### Йылайырҙан тағы бер ҡурайсы

Ишмулла Дилмөхәмәтовҡа арналған был бәйгелә мин тәү башлап 90-сы йылда сығыш яһап, беренсе урын алғайным. Дөрөҫөн әйткәндә, беренсе тапҡыр ҙур конкурсҡа сығырға йөрьәт итеүем дә ошо ваҡытҡа тура килгән икән. Сығышыбыҙ менән Баймаҡ районы Йылым ауылынанбыҙ, әммә атайымдар Йылайыр районы Матрай ауылында йәшәне. Шуға ла ҡурайсы булараҡ инструментальный үҫешемдә Йылайыр ерене роле ҙур, тип иҫәпләйем.

Ҡурайҙа уйнарға башлап атайым өйрәтте. Алтынсы класты тамамлағас, бесән эшләп йөрөгәндә бер ҡосаҡ ҡурай ҡырҡып алдым да, уның алдына алып барып һалдым. Бәхтиһән, был айыу көпшәһе булып сыҡҡан икән. Шул мәлдә атайым беренсе тапҡыр ҡурайҙы күрһәтеп, ҡырҡып алып, эшләп бирҙе. Ҡурайҙа һыҙғыртырға бәләкәйҙән белә инем, төшкө ашты ашаған арала көйҙең яртыһын өйрәнеп тә өлгөрҙөм. Атайым да, уның ағаһы Миңлеғәле олатайым да ҡурайҙа яҡшы уйнаны. Һигеҙенсе класты тамамлап, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға ингәс, башта Ғата Сөләймәнова, аҙаҡтан Азат Айытҡоловта уҡыным. Юлай ағай Ғәйнетдиновты ла уҡытыусым, тип иҫәпләйем, сөнки уға нindәй генә һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, ярҙам итеп, дөрөҫ йүнәлеш биреп ебәрә. Юлай Ғәйнетдиновтың тырышлығы менән был конкурстарға яңы талаптар ҙа индерелде, унда ҡатнашыусылар хәҙер 70 халыҡ көйөн уйнай белергә тейеш. 2016 йылда үтәсәк Йомабай Иҫәнбаев исемендәге конкурсҡа был көйҙәрҙең һаны 100-гә етәсәк, тип торабыҙ. 100 көй ҡурайсы өсөн күп тә түгел, борон ҡурайсылар тағы ла күберәк белгән. Әммә ошо ябай ғына талап бәйгесегә ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Конкурс алдынан туҡтамайынса 10-13 сәғәт ҡурай уйнаған мәлдәр була, сөнки ҡабатлап тормаһаң, көй онотола. Бәйгелә ҡурайҙың мөмкинлеген, үҙеңдең оҫталығыңды күрһәтергә кәрәк, шуға көйҙө дөрөҫ һайлау мөһим. Был конкурсҡа "Ашҡаҙар"ҙы алдым, ул "Буранбай" кеүек бөйөк оҙон көйҙәрҙең береһе. "Шарлы урман" да күңелемә яҡын, ә билетка "Тәфтиләү" сыҡты. Ниндәй генә көйҙө алһаң да, уны ерен еткереп уйнарға кәрәк, шул уҡ "Буранбай"ҙы ҡабалан ғына һикертеп уйнаһаң, уның бөтөн нескәлеген, һағышын биреп булмай. Мин был көйҙө 18 йәштә үк белһәм дә, сәхнәлә беренсе тапҡыр 42 йәштә генә уйнаным, сөнки уны халыҡ игтибарына сығарыу өсөн үҙең эстән өлгөрөп етергә тейешһең.

### Әҙемдән киләләр...

1978 йылда Өфө сәнғәт училищеһын тамамлағас, Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә барырға мөмкинлегем бар ине. Тик Ғата ағайҙың, һинән башҡа ла артистар етерлек, уҡытыусы булырға тейешһең, тигән һүҙҙәрен тыңлап, Йылайырға ҡайттым. Матрайҙа, Йылайыр музыка мәктәбенең филиалында, ҡурай класы асып ебәрҙем. Шул рәүешле районымда ҡурайҙың профессиональ үҫешенә юлды мин һалдым. Быйыл был ваҡиғаға ла теп-теүәл 35 йыл булып киткән. Матрайҙа 18 йыл эшләнем, төрлө сәнғәт училищеларын, Өфө дәүләт сәнғәт академияһын тамамлап, киләсәген ҡурай менән бәйләгән уҡыусыларым байтаҡ. Мәҫәлән, Илшат Солтангәрәев хәҙер үҙе дәрәжәле бәйгеләрҙә өс гранпри яулаған егет. Марсель Сәйетов - Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, Азамат Асанов Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрында ҡурайсы булып эшләй. Илнур Үтәйев Дилмөхәмәтовҡа арналған бәйгелә Юнир Һағынбаев беренсе урынға лайыҡ булды. Октябрьскийҙа үткән Ҡурай байрамында гран-приға мин 2010 йылда лайыҡ булғайным, хәҙер уҡыусыларымдың да төп призды алып бөтөп барыуы минең өсөн ғорурлыҡ.

Тәбиғәттән килгән һәләтемде, халҡымдан алған моңомдо кире халҡыма ҡайтарып бирә алыуым менән бәхетлемен. Бөгөн был егеттәрҙең күбеһе шулай уҡ мөғәллимлек эше менән шөғөлләнеп, үҙе белгәнде, мин өйрәткәнде киләсәк быуынға тапшыра. Бынан да ҙурыраҡ, дәрәжәлерәк һөнәр барлығын мин белмәйем дә. Шуға ла яҙмышымдан шул тиклем ҡәнәғәтмен. Халҡыбыҙҙа талантлы егеттәр күп тә, тик бөгөнгө баҙар иҡтисады шарттарында ата-әсәләр балаларының музыка йүнәлешендә белем алыуын теләмәй - шуныһы ғына хәүефләндерә. Мәктәптәрҙә ҡурай түңәрәктәре ҡыҫҡарҙы, йылдан-йыл училищеларҙа абитуриенттар һаны аҙая.

Өлкәһенең Барҙым районында балаларҙы ҡурай уйнарға өйрәтергә тура килгәйне. "Беҙ - башҡорттар!" тип, ҡурайҙа бик яратып уйнайҙар унда. Ҡанда булғанды бер нәмә менән онотторол булмай ул. Төньяҡ-көнбайыш райондарҙа ҡурайҙы пропагандалау маҡсатынан ойошторолған Ҡурай байрамы ла был төбәктә ҡурайсыларҙың артыуына килтерҙе. Тел айырымлығы булһа ла, булмышы менән башҡорт булғанға күңелдәрендә ҡурайға һөйөү һаман да йәшәй,



**Ҡурайҙы һәр ҡурайсы үҙ дәүерендә данларға бурыслы. Үҙ ваҡытында Ишмулла Дилмөхәмәтов үлән ҡурай менән Ер шарын урып сыҡҡан, унан һуң Азат Айытҡолов сит халыҡтарҙы ҡурай уйнап һоҡландырған. Бөгөн Роберт Юлдашев сит илдәрҙә башҡорт ҡурайы алдында әллә күпме тамашасының башын әйҙереп йөрөй икән, уға дан ғына. Хәҙерге быуын башҡорт көйҙәрен Роберт Юлдашев, Азат Биксурин уйнауы аша белә, йәйләп улар классик боронғо көйҙәрҙе лә тыңлай башлаясаҡ.**

бик талантлы һәм өмөтлө егет ине, арабыҙҙан бик иртә китеп барҙы. 1996 йылдан Сибай институтында һәм бер үк ваҡытта Сибай сәнғәт училищеһында белем бирә башланым, Венер Йылҡыбаев, Юнир Һағынбаев, Рәмил Ҡотдосов шулай уҡ минең уҡыусыларым. Уҡыусыларымдың артымдан үксәмә баҫып килеүенә ҡыуанам, сөнки уҡыусы уҡытыусыһынан һәр ваҡыт яҡшыраҡ булырға тейеш. Берәй конкурс була ҡалһа, улар "Һеҙ ҡатнашаһығыҙмы?" тип һорайҙар ҙа, "Эй, улай булғас, гран-приңы эләктереп булмаҫ инде", тигән буалар. Минең бындай бәйгеләргә йөрөүем йәштәргә стимул да бирә, уларҙың оҫтараҡ булырға тырышыуы үҙе бер үҫеш. 2011 йылда Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға Республика ҡурайсылар конкурсында мин гран-при, ә Рәмил менән Венер беренсе урын алды, быйыл Ишмулла

### Ҡурай - рух тәрбиәсеһе

Сит ерҙәрҙә "Мин башҡортмон", тиһән, шунда уҡ милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың исемен телгә алалар. Ул да ҡурайҙа уйнаған, йырлаған, импровизатор булған. Тимәк, һин башҡорт һәм ысын ир-егет икәнһең, мотлаҡ ҡурайҙа уйнай белергә тейешһең, тием егеттәргә. Ҡурайсы кеше спиртлы эсемлектәр эсеү, тәмәке тартыу кеүек яман ғәҙәттәрҙән дә баш тартасаҡ. Йәштәрҙе ҡурайға ылыҡтырыу - уларҙа рух тәрбиәләүҙең бер юлы ул. Көйҙәрҙе өйрәнгәндә уның тарихы менән дә танышаһың, ә халҡының тарихын белгән кешенең үҙаңы уяна, унда халҡы өсөн ғорурлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә. Бындай кеше бер ҡасан да үҙ ерен дә, илен дә һатмаясаҡ.

Ҡурай - ул башҡорттоҡо, унда сит милләт уйнай алмай. Пермь тимәк. Ҡаҙағстанда ла тырышып-тырышып ҡурайҙа уйнарға өйрәнәләр. Ҡурайҙы ҡаҙаҡ һыбыҙғыһы тип йөрөтһәләр ҙә, Башҡортостанда яһалған башҡорт ҡурайҙарында уйнайҙар. Мин белгәндән алып ҡына ун биш йыллап әүҙем эш алып барыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡурай сәнғәте унда үҫешмәй, сөнки ул уларҙыҡы түгел. Ә бына думбырала һәр икенсе ҡаҙаҡ кешеһе уйнай. Борон башҡорттар ҡаҙаҡ далаларында йөрөгәндә ҡаҙаҡтарҙы ла ҡурайҙа уйнарға өйрәткәндәр һәм улар араһында ҡурайға һөйөү шунан тороп ҡалғандыр, тип уйлайым. Беҙҙә иһә, һәр икенсе башҡорт малайы ҡурайҙа һыҙҙыра. "Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамаҫ, башҡорт ҡурайҙары булмаһа", тиелә йырҙа ла. Ер шарында башҡорт тигән милләт барҙа ҡурай ҙа буласаҡ, уларҙы бер-береһенән айырып ҡарау мөмкин дә түгел.

### Һәр дәүерҙең үҙ оҫтаһы

Бөгөн стилизация тигән әйбер милли сәнғәттең һәр өлкәһенә үтеп инде. Заманға яраҡлаштырып аранжировкаланған халыҡ көйҙәрен уйнау, ҡурайҙа сит ил көйҙәрен башҡарыуға ҡарашым ыңғай. Йәштәр өсөн ниндәйҙер яңы йүнәлеш булырға тейеш. Улар ҡурайҙың бер нәмәһен дә боҙмай, киреһенсә, традицион биш уйымлы ҡурайҙа ниндәй генә көйҙәр уйнамайҙар. Бының өсөн дә ҙур оҫталыҡ, көс һәм тырышлыҡ кәрәк.

Ҡурайҙы һәр ҡурайсы үҙ дәүерендә данларға бурыслы. Үҙ ваҡытында Ишмулла Дилмөхәмәтов үлән ҡурай менән Ер шарын урып сыҡҡан, унан һуң Азат Айытҡолов сит халыҡтарҙы ҡурай уйнап һоҡландырған. Бөгөн Роберт Юлдашев сит илдәрҙә башҡорт ҡурайы алдында әллә күпме тамашасының башын әйҙереп йөрөй икән, уға дан ғына. Хәҙерге быуын башҡорт көйҙәрен Роберт Юлдашев, Азат Биксурин уйнауы аша белә, йәйләп улар классик боронғо көйҙәрҙе лә тыңлай башлаясаҡ. Башҡортостанда йәшәп, ҡурайҙы яҡындан ултырып тыңламаған кешеләр ҙә күп бит. Борон ҡурайсылар нимәһе менән айырылған: улар башта йырҙың тарихын һөйләп алған, унан көйөн уйнаған. Башҡорт йыры тураһында бер нәмә белмәгән кеше ҡурайҙа уйнағанды аңламай, ә көйҙең тарихын һөйләп тороп, уйнап ебәрһәң, барыһына ла тәьҫир итә. Шуға, ҡайҙа мөмкинлек тыуа, хатта поезда йөрөгәндә лә ҡурай менән барыһын да таныштырып йөрөргә тырышам.

Быйыл Ишмулла Дилмөхәмәтовҡа арналған конкурста Гранпри алғас, "Атайсал" гәзите минең турала "Иң шәп ҡурайсы" тигән исем менән мәҡәлә баҫтырғайны. Хәҙер ике йәш ярымлыҡ улым: "Минең атайым иң шәп ҡурайсы, мин дә ҙурайғас иң шәбе булам", - тип әйтеп йөрөй. Ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнә, ҡурайға ла ҡыҙыҡһыныуы көслө. Тылым ныҡлы, шөкөр, дәртләндереп тороусыларым бар, ғаиләм миңә ышанғас, мин дә уларҙың ышанысын аҡларға тырышып торам. Киләсәк бит ябай ғына нәмәләрҙән - үҙеңдең дөрөҫ йәшәүеңдән, балаларҙы дөрөҫ тәрбиәләй белеүҙән тора.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Шулай ҙа конкурста иң ҙур бәһаны уҡыусыларым бирҙе. Егеттәр сәхнәнән төшөүөмдө көтөп торғандар ҙа, мине күтәреп алып, күккә сөйҙөләр. Тимәк, мин бушҡа эшләмәгәнмен", тип ҡыуанысы менән уртаҡлашҡайны ҡурайсы. Нурғәли Мирғәли улы кеүек иң шәп ҡурайсылар әҙерләүгә өлгәшә алған уҡытыусы бындай ҙурлауға ысынлап та лайыҡ. Был шәп егеттәрҙең бөгөн сәхнә менән уҡытыу эшен бергә алып барыуҙарын да иҫәпкә алһаҡ, тимәк, башҡорт ҡурайының киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа. Остаздары кеүек, улар ҙа үҙ уҡыусыларынан уңһын, тип теләйек.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

***✓ - Иптәш Ишбулдина, - тине Сабит, - яҡшылап әҙерләнеп, имтиханға ҡабаттан килергә тура килер һеҙгә. Ә хәҙергә һеҙҙең яуабығыҙ өсөн "икеле"нән дә артыҡ билдә ҡуя алмайым... Хушығыҙ.***





Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Мәк сәскәһе

(Хикәйә)

Сәғәт төнгө икеләрҙә һаҡсының "Заключенный номер 367, на выход!" тигән бойороғона камералағы барыһы ла тиерлек уянды. "Эй, хирург, тор, һиңә килгәндәр", тине тәмәке тартырға торған тотҡондарҙың береһе. Ҡараңғы мөйөшкә әйләнеп, ниндәйҙер төш күрә-күрә, үҙен сығырға саҡырғандарын да ишетмәй һаман йоҡлап ятҡан Сабит арҡаһына ҡаты ҡағылыуҙан уянып, тиҙ генә торҙо ла, янындағы тумбочка өҫтөндә ятҡан күк спецовкаһын алып кейә лә башланы. "Нимәһе тағы, төнө менән йоҡо бирмәйҙәр", тип бурылданы кемеһелер, артынса боросло-тоҙло һүҙҙәр ҡушып. Камеранан сыҡҡас та, ғәҙәтенсә, ҡулдарын артҡа ҡаушырып, үҙен оҙата килгән прапорщиктың алдынан китте. "Дауаханаға саҡырталар", тине һаҡсы әкрен генә, тотҡон менән һөйләшеү ҡәтғи тыйылыуына ҡарамаҫтан. "Аңланым", тине Сабит та тын ғына.

Төрмәгә килгән көндә үк "хирург" ҡушаматы алған Сабит бындай саҡырыуҙарға күнегеп тә бөткән инде. Күптән түгел утыҙ дүрт йәшкә аяҡ баҫҡан был тотҡон, ысынлап та, һөнәре буйынса хирург. Ул ғына ла түгел, кеше йөрәгенә һәм ҡан тамырҙарына һәр төрлө ҡатмарлы операциялар яһай торған кардиохирург. "Медицина фәндәре кандидаты" тигән фәнни дәрәжәһе лә бар ине. Уның вазифаһына инмәһә лә, төрмә дауаханаһының хирургия бүлегенә ҡайсаҡ шаҡтай ҡатмарлы имгәнеү-фәләң менән әленән-әле килеп эләккән пациенттарға консультация өсөн уны шулай саҡыртҡылайҙар. Консультациялар яһап ҡына сикләнмәй ул, күп кенә осраҡтарҙа өҫтәндәге төрмә кейемен һалып, йыуынып, аҡ халат кейеп ала ла, үҙе әүҙем эшкә керешеп китә. Рәсми рөхсәте булмаһа ла. Төрмә начальниктары ла, табибтар ҙа быға "күҙ йома" тиһәң, бигүк дөрөҫ тә булмаҫ, сөнки бындай "хазина"ға, киреһенсә, тик һөйөнәләр генә...

"Заточка" (үткерләнгән ҡорос ҡалаҡ) менән йөрәге йәрәхәтләнгән тотҡонға операция яһап бөткәндән һуң, душ аҫтында йыуынғас, һаҡсы уны ҡабаттан камераһына алып килеп япты. Ауырыу тарихына, әлбиттә, ҡул тамғаһы ҡуйырға ла хаҡы юҡ Сабиттың. Шуның өсөн дә ундай-бындай яҙыу-маҙар һымаҡ нәмәләр өсөн яуаплы түгел ул. Таңға ҡарай ғына урынына килеп ятҡан тотҡон тиҙ генә йоҡлап китә алманы. Һәр ваҡыттағыса, яҫтыҡҡа башын терәп, күҙҙәрен йомоуы була, ни өсөндөр, үҙенең матур таждарын асып, баҙыҡ ҡыҙыл төҫтәге мәк сәскәһе килә уның күҙ алдына. Һылыуҙарҙан һылыу мәк сәскәһе...

* * *

...Университеттың лекция залында тәүге тапҡыр осратты уны Сабит. Ҡараштары осрашыу менән, әкиәттәгесә сибәр был ҡыҙ төҫлө фильмдарҙағы зәңгәр диңгеҙҙе хәтерләткән күҙҙәре менән уның үҙен "өтә һалып" алғайны. Ысынлап та, бындай гүзәл заттың матурлығын бер нисек тә һөйләп килештерерлек түгел. Бөгәләп торған оҙон керпектәр аҫтынан баҡҡан мөләйем был ҡарашҡа сихырланғандай булып, хатта залдағы студенттар менән иҫәнләшергә асҡан ауыҙын да япмай, бер нисә секундҡа "ҡатып ҡалды". Ҡыҙҙың ынйылай тештәрен бер аҙ ғына күрһәтеп, еңелсә йылмайған ирендәренә ҡарап, йәйге эҫе селләлә ифрат та ныҡ сарсап, көтмәгәндә һалҡын шишмә янына килеп сыҡҡан мосафирҙай тамшанып ҡуйҙы. Нәфис яурынбашына тулҡынланып таралған алтындай һары сәстәренә хәтле, ысынлап та, был гүзәл затҡа бигерәк килешә. Башҡаларҙыҡынан ҡырҡа айырылып торған сағыу ал төҫтәге күлдәге лә ниндәйҙер бер сәскә тажын хәтерләтә. Буйы-һынында һис бер етешһеҙлеге булмаған идеаль тип әйтерлек был ҡыҙ, ысынлап та, торғаны менән бер тере сәскә ине. Әле генә бөрө эсенән сыҡҡан йәш, күҙҙәрҙе ҡамаштырырлыҡ мәк сәскәһе! Матур ҡыҙҙарҙы күп күргәне бар Сабиттың. Әммә, бындайын да һылыу ҡыҙҙы ул ғүмерендә тәүге тапҡыр күрә. Алтын сәсле, ҙур зәңгәр күҙле булыуына ҡарамаҫтан, ыҡсым ғына бер аҙ ҡалҡып торған бит остарына ҡарап, мәрйә ҡыҙы тип тә әйтеп булмай уның хаҡта ҡапылда...

"Сәскә"нең тылсымынан көскә айырылып, студенттар менән иҫәнләште лә, трибунаға үтте. Үткән йыл ғына кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлаған, егерме һигеҙенсе йәш менән барған Сабит тышҡы ҡиәфәте менән өлкән курс студентын хәтерләтә. Уның ошоғаса буйҙаҡ икәне лә, студент халҡына, әлбиттә, мәғлүм. Әллә шуғамылыр, студенттар араһындағы ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ ҡыҙҙар уға һәр төрлө серле ҡараш та "бүләк иткеләй". Айырыуса ҡала ҡыҙҙары. Йәнәһе, һинең уҡытыусы булыуыңа беҙҙең иҫебеҙ китеп бармай әле... Эх, замана ҡыҙҙары... Оператив хирургия предметынан өсөнсө курс студенттарына уҡылған тәүге лекция тамамланғансы, теге "хан ҡыҙы" унан күҙен дә алманы. Булсаҡ табибә уның лекцияһын айырыуса иғтибар менән тыңлап ултырғандай тойолдо...

Йәйге сессия килеп еткәнсе, фәҡәт лекция ваҡыттарында ғына, ҡараштары менән генә осрашты улар. Тәүге ҡарауҙа уҡ һушын алған зәңгәр күҙҙәрҙе күреү теләге менән янды егет һәр саҡ. Үҙенең сираттағы лекцияһын түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Тик ни өсөндөр һуңғы осорҙа, айырыуса икенсе ярты йыллыҡ башланғас, лекцияларға йөрөүен һирәгәйтте ҡыҙый. Уға үҙе уҡытҡан фән буйынса семинар дәрестәрен үткәреү өсөн бөтөнләй башҡа төркөмдө бирҙеләр. Шуға күрә, Сабит үҙенсә "мәк сәскәһе" ҡушаматын биргән был сибәркәй менән бер йыл тиерлек ваҡыт үткәс кенә, имтихан ваҡытында тәүге тапҡыр һөйләшеү бәхетенә ирешә.

Ул имтихан алыу бүлмәһенә ингәндә, биш-алты студент үҙҙәренең алған билеттарына яуап әҙерләп ултыра ине инде. Сабит инеү менән иң алғы партала ултырған әлеге ҡыҙ уға тағы утлы ҡарашын ташланы. Бәлки, уның был ҡарашы бик тә ябай, тәбиғиҙер ҙә. Әммә йәш ассистентты был зәңгәр күҙҙәр тағы ла әсир итте.

-Кемегеҙ яуап бирергә әҙер? - тине Сабит Хәкимович бер аҙҙан ҡулындағы сәғәтенә ҡарап. Тик ул ошо мәлдә, үҙе имтихан бирергә әҙерләнгән студенттай, бер аҙ тулҡынлана башлағанын тойҙо. Шул хәл етмәгәйне, ауыҙыңа май туңғыры. Бүлмәлә һалҡынса булыуға ҡарамаҫтан, маңлайынан тир бәреп сыҡты. Уның был хәлен имтиханға килеүселәр һиҙмәһә генә ярар ине.

-Мөмкинме? - тине был юлы ла ҡыҫҡа аҡ халаты эсенән ни өсөндөр әлеге баҙыҡ ал төҫтәге күлдәген кейгән ҡыҙ. "Мөмкин, әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ". Нишләптер, сибек кенә әйтелгән һымаҡ тойолдо имтихан алыусының яуабы. Бәлки, Сабиттың үҙенә генә шулай тойолғандыр. Биленең аҫҡы яртыһын артистарса бик килештереп, сайҡал-сайҡал атлап, ҡыҙ уның ҡаршыһына килеп ултырҙы. Тырыша-тырыша билеттарының һорауҙарына яуап әҙерләгән башҡаларҙа, әлбиттә, улар ҡайғыһы юҡ ине.

Ғалимдар иҫбатлауынса, хатта сәскәләр ҙә, һеркәләнер мәлдә үҙҙәренә ҡунырға тейешле бал ҡорттарын йәлеп итеү өсөн, нәҡ тере йән эйәләре һымаҡ, шул бөжәктәр алдында матурланыу һәләтенә эйә икән. Тәбиғәттең Аллаһ ҡушҡан законы буйынса, бындай күренеш, әлбиттә, кешеләргә уғата ла хас була торғандыр. Әллә шуға, әллә ни, һәр хәлдә, Сабит өсөн был ҡыҙ бөгөн айырыуса матур һымаҡ тойолдо. Хәйер, һәр күргән һайын ҡыҙ тағы ла һылыуыраҡ була бара. Аҡ целлофанға төрөп, тере сәскә алып килеп ултыртылармы ни уның алдына.

-Тә-ә-әк, - тине Сабит Хәкимович тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә тырышып, бер аҙ тамаҡ ҡырып алды, - фамилиягыҙ нисек? - Алдында ятҡан исемлеккә ҡараны.

-Ишбулдина Гөлгөнә, - тине ҡыҙ сылтырап торған, көмөштәй матур тауышы менән. - Можно просто Гуля...

-Билетығыҙҙың тәүге һорауын уҡығыҙ, - тине Сабит өҫкө керпектәре аҫтынан һаман да уға серле итеп ҡарап, еңелсә йылмайып ултырған ҡыҙға. Студенттар менән аралашыуҙа инде байтаҡ тәжрибә туплап өлгөргән мөғәллим шулай ҙа үҙен тиҙ ҡулға алды. Әлбиттә, студент алдында ебеп ултырмаҫ бит инде ул.

-Йөрәктең анатомик төҙөлөшө. Уның функцияһы... - тип үҙенең билетындағы һорауҙарҙы уҡый башланы ҡыҙ.

-Тыңлайым.

-Кеше йөрәге дүрт камеранан тора, - тип башлап алып китте Гөлгөнә. Әммә теманы мәктәптәге биология дәресе программаһы кимәлендә лә асып бирә алмайынса, берике һөйләм әйткәндән һуң, тынып ҡалды.

-Артабан, - тине студенттың яуабын бик иғтибар менән тыңлағандай, уның күҙҙәренә ҡарап ултырған Сабит.

-Йөрәк - кеше организмын ҡан менән тәьмин итеүсе насос...

-Шунан...

-А вообще, иптәш преподаватель, йөрәктең мөхәббәт органы икәнлеге хаҡында фекер йөрөй...

Быны һиңә - мә!.. Әйтте лә һалды бит ҡыҙыйың... Башҡалар ишетмәнеме, тигәндәй, был ҡыҙҙың әрһеҙлегенә шаҡ ҡатҡан Сабит Хәкимович тирә-яғына ҡаранып алды.

-Тағы нимә әйтә алаһығыҙ йөрәк тураһында, Ишбулдина? - имтихан алыусы көләмһерәне.

- ...

Икенсе һорау буйынса ла был ҡыҙҙың белеме юҡ кимәлендә ине, әйтерһең дә, ул өсөнсө курс студенты түгел, ә урамдан ингән осраҡлы ғына кеше. Ә инде өсөнсө һорауға яуап, барлыҡ медицина юғары уҡыу йорттарындағы ҡанун буйынса, кеше мәйетендә күрһәтеп һөйләп бирелергә тейеш. Формалин аңҡып торған мәйеттең асылған эсендә соҡсоноп, кеше эсәгенең һәр бүлеген резина перчатка кейгән ҡулдары менән тотҡолап күрһәтә-күрһәтә, шул турала һөйләп сығырға тейеш ине ҡыҙ.

-Сабит Хәкимович, мин вообще мәйеттән ҡурҡам, - тине буласаҡ табибә.

-Ә семинар дәрестәрендә нисек уҡыныйыҙ һуң? Анатомия предметынан нисек "дүртле" алыуға өлгәштегеҙ? - тип ғәжәпләнеп һораны мөғәллим ҡыҙҙың зачеткаһын асып ҡарай-ҡарай. Ишбулдинаның өс йыл буйына йыйылып килгән башҡа билдәләре лә яҡшы ғына ине.

- ...

Был студенттың медицина институтында етди фәндәрҙең береһе булған оператив хирургия буйынса белеме юҡ кимәлендә булыуы аптыратты Сабитты. Хатта бер аҙ "өслә"гә тартырлыҡ өҫтәмә һорау биреүҙән дә файҙа юҡ ине. Инде башҡа студенттар билеттарына яуап әҙерләп бөтөп, имтихан алыусы бушағанын көтә башланы.

-Иптәш Ишбулдина, - тине Сабит, алдында ятҡан журналға ниҙер яҙғандан һуң - яҡшылап әҙерләнеп, имтиханға ҡабаттан килергә тура килер һеҙгә. Ә хәҙергә һеҙҙең яуабығыҙ өсөн "икеле"нән дә артыҡ билдә ҡуя алмайым... Хушығыҙ.

Ҡыҙҙың әллә ни кәйефе төшкәндәй ҙә күренмәне. Үҙенең тылсымлы ҡарашы менән йәш уҡытыусыны сираттағы мәртәбә "сәнсеп" алғандан һуң, зачет кенәгәһен алып, бағы һымаҡ уҡ ифрат та килештереп атлап, бер ни ҙә өндәшмәй сығып китте. Үҙенең артынан имтихан алыусының мотлаҡ рәүештә ҡарап ултырып ҡалырына шиге юҡ ине буғай үҙ баһаһын белгән был ҡыҙҙың. Предмет буйынса белеме нулгә тиң булған студенттың ҡарашында "Ҡуйырһың билдәңде, нисегерәк ҡуйырһың..." тигәндәй уҡырға булыр ине...

Шундайын да матур ҡыҙҙы һис бер сәбәпһеҙгә ҡыйырһытҡандай тойҙо үҙен Сабир Хәкимович. Әйтерһең, лайыҡ булмаған "икеле"не ҡуйҙы уға. Уның шул һылыулығы өсөн генә лә ыңғай билдә ҡуйып сығарыуы бер ни ҙә түгел ине лә бит. Әммә, ниндәйҙер эске тауыш: "Ашыҡма, егет. Бындайын да гүзәл затты башҡаса күргәң килмәйме ни?.." - тигәндәй булды. Ысынлап та, затлы гәүһәр ташты хәтерләткән, үҙен һуштан яҙҙырған

шул күҙҙәргә тағы һәм тағы ҡарап һөйөнгәнә килде егеттең. Киләһе осраҡта, әлбиттә, һис шикһеҙ ҡыҙға "өслө" билдәһе булһа ла ҡуясаҡ ул...

-...Ниндәй "өслө" һөйләйһегеҙ, - тине уға проректор, иртәгәнән эшкә килеү менән уны үҙенең бүлмәһенә ашығыс рәүештә саҡыртып, бер аҙ һөйләшеп алғандан һуң. - Ишбулдинаның зачет кенәгәһендә кәмендә "дүртле" торорға тейеш! Ҡала хакимиәтендәге "ҙур" кешенән шылтыратыу булды. Был студенттың әсәһе ана шул кешенең яҡыны икәне әллә ҡасандан уҡ беҙгә мәғлүм...

- Тәүге мәртәбә ишетәм, Израил Исаевич.

- Һеҙ мине дөрөҫ аңланығыҙ, тип ышанам, Сабит Хәкимович...

Уҡыуҙа шундай насар өлгәшкән Гөлгөнәнең университеткә уҡырға инеп, өсөнсө курстың аҙағына ҡәҙәр нисегерәк килеп етә алғанын аңланы инде хәҙер Сабит. Әлбиттә, матур күҙҙәре өсөн генә түгел. Фәҡәт ана шундай көслө "этәреүсе"һе булған өсөн дә был ҡыҙҙың ҙур уҡыу йортона инеп, хәҙергәсә "батмай" барыуына шиге ҡалманы Сабиттың. Ҡайҙалыр ишеткән мәҙәк кенә бер таҡмаҡты иҫләп алды.

*Һин дә булдың көтөүсе,*
*Мин дә булдым көтөүсе.*
*Беҙ ҙә айға менер инек*
*Арттан булһа этеүсе...*

Ҡуйҙы Сабит, ҡуйҙы билдәне. Хөрмәтле Исаевич әйтмешләй, "өслө"нө генә лә түгел, ә күпкә юғарыраҡты. Был юлы ла студенттың яуабының рәте юҡ ине. Әммә... Киләсәктә кеше ғүмере өсөн яуаплы кадр - буласаҡ табиб ифрат та белемле булырға тейешлеген үҙенең начальнигына иҫбат итеп маташыуҙан фәтеүә булмаясаҡ, ахырҙа, артабан "елгә ҡаршы борсаҡ һипмәскә" булды Сабит Хәкимович. Үҙенә үҙе дошман түгел дә ул... Өҫтәүенә, әлеге мәк гөлләмәһе... "Буйҙаҡ егет Сабит" был юлы "принципиаль преподаватель Сабит Хәкимович"тан өҫтөнлөк итте. Тәҡкә-башҡа үҙе лә насар булмаған был егет, бар донъяһына төкөрөп, ана шул ҡыҙ менән яҡындан танышып алыу маҡсатын ҡуйҙы үҙенә хатта. Бәлки, унан башҡа ла тап шундай ниәтле егеттәр етерлектер. Һис шикһеҙ. Әммә Сабиттың башҡаларҙан өҫтөнлөгө бар ине шул. Медицина фәндәре кандидаты тигән исеме генә ни тора! Шуғалыр ҙа, егет был ҡыҙыйҙы үҙенә ҡаратып алырына бөтөнләйгә ышана ине тиерлек. Тик нисегерәк унайлы мәл табырға? Ҡыҙ үҙе лә уға битараф түгел, буғай... Әле ҡабаттан имтиханға килгән Гөлгөнә, үҙенең зачетка-һындағы лайыҡ булмаған "бишле"не күргәс, Сабитты эләкләгән һымаҡ итеп, шаян йылмайып, уға телен күрһәтте лә, күптәнге яҡын танышы менән хушлашҡандай, йәтеш кенә итеп ҡул болғап, "Чао!" тип аудиторияның осоп сығып китте. "Беҙҙең әле тағы ла осрашыуыбыҙ мөмкин", тигәнде уҡырға булыр ине сираттағы был ялҡынлы ҡараштa.

(Дауамы бар).

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СИТТӘГЕ МИЛЛӘТТӘШТӘР...

## беҙҙе көтөп йәшәй

**Нәзир ҠОЛБАХТИН, БДУ-ның тарих факультеты профессоры, тарих фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре:** Донъя кимәлендә Рәсәй өсөн, дәүләт кимәлендә - Рәсәйҙәге халыҡтар, шул иҫәптән, башҡорттар өсөн бик ҡатмарлы заман килде. Донъяла глобалләшеү тәғлимәте хөкөм һөрә. Ошо фонда айырым милләттәрҙең һаҡланып ҡалыуы мәсьәләһе үтә киҫкенләшә. Был мәсьәлә башҡорт халҡы өсөн дә актуаль.

Мине бигерәк тә ауылдарҙа мәктәптәр ябылыу мәсьәләһе борсой. Мәктәп эшмәкәрлек итеүҙән туҡтаһа, ауылда мәҙәниәт сығанағы ла, тимәк, ауыл үҙе лә һүнә. Тағы ла, юғары уҡыу йорттарының факультеттарын, хатта уҡыу йорттарының үҙҙәрен дә ябалар хәҙер. Сәбәптәр араһында "дәүләткә килем килтермәй" тигән графа ла бар, тиҙәр. Мәғариф өлкәһен оптималләштереүҙе бөгөнгө Рәсәй өсөн дә, унда йәшәүсе халыҡтар өсөн дә хилафлыҡ килтерә торған иң уңышһыҙ эштәр рәтенә ҡуйыр инем. Был мәсьәлә күпме тапҡыр күтәрелә лер, әммә һорауҙарға яуап табылмай.

Мине тағы ауылдарҙағы эшһеҙлек, эшһеҙлек арҡаһында егеттәрҙең эскегә бирелеүе, ә ҡыҙҙарҙың күпләп ҡалаға китеүе борсоуға һала. Ауылда егеттәр ҡырҡҡа, иллегә еткәнсе өйләнмәй йөрөп, алама ғәҙәттәргә бирелеп, үлеп китә, ә ҡыҙҙар ҡалала гастарбайтерҙар кимәлендәге эшкә ялланып эшләй. Аҡса, эш артынан ғаиләләре менән ҡалаға китеп, подвалдарҙа, дөйөм ятаҡтарҙа, кеше фатирҙарында көн күреүсе милләттәштәребеҙ ҙә етерлек. Был - милләттең тағы бер трагедияһы.

Һүҙемдең башында беҙҙең милләткә лә юғалыу ҡурҡынысы янауы тураһында телгә алғайным инде. Ошо хәлдә булдырмаҫ өсөн иң тәүҙә райондарҙа мәктәптәрҙе һаҡларға, эш урындары булдырырға ынтылырға кәрәк. Башҡорттоң һанын һаҡлау өстөндә лә ентекле һәм уйланылған эш алып барылыуы зарур. Ассимиляция тигән ғәләмәт XIX быуатта ла булған, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә генә түгел, Башҡортостан райондарында был процесс әле лә дауам итә. Әйтәйек, Татарстандың Баулы, Бөгөлмә, Аҙнаҡай, Әлмәт, Аҡтаныш, Минзәлә, Зәй райондары - Минзәлә өйәҙе. Ә Октябрь революцияһына тиклем Минзәлә өйәҙендә 200 мең башҡорт йәшәгәнлеге билдәле. Сиктәрҙе Ыҡ йылғаһы буйлап билдәләгәс, ул ерҙәр Татарстан биләмәһенә күсә һәм 1927 йылдағы халыҡ иҫәбен алғанда был төбәк халҡы тотошлайы менән үҙен татар тип яҙҙыра. Әйткәндәй, Рәфил Аҫылгужин һәм Юлдаш Йосопов исемле ғалимдарыбыҙ ошо ерҙәрҙә йәшәүсе башҡорттар менән осрашып, вариатив мәғлүмәттәр туплап ҡайтты, әле лә был йүнәлештә эшләйҙәр. Был - бик шәп башланғыс.

Пермь крайында йәшәүсе башҡорттар менән күп аралашырға, уларҙың 2006 йылда үткәргән йыйынында Өлфәт Ҡобағошов менән бергә ҡатнашырға ла тура килде. Шул осрашыуҙан һуң Пермь халҡы менән аралашып торам. Ғәйнә ырыуы халҡы бөгөн башҡорт ғалимдары, яҙыусылары менән осрашыуҙар көтөп йәшәй: "Бөйөк Ватан һуғышына тиклем килә инегеҙ, нинә бөгөн килмәйһегеҙ?" - тип өндәшә оло йәштәгеләр. Барҙы төбәгендә тыуып-үҫкән шағирҙар, композиторҙар, рәссамдар ижад емештәрен Башҡортостан халҡы менән уртаҡлашырға зар илай, ләкин башҡорт йәмәғәтселеге уларҙың зарын ҡәнәғәтләндерә алмай әле. Мәҫәлән, Һәүбән Шоғанаев исемле композиторҙы, Рәфис Батырҡай исемле рәссамды беҙҙә белмәйҙәр ҙә, тиерлек. Ҡарарҙар ҡабул итеү юлы менән йырып сығып булмаған мәсьәләләрҙе ошолай йырып сығыу отошлораҡ булмаҫ инеме икән? Быныһы аҡыллыға - ишара, тигәндәй...

Ағас тамырын юллаған ваҡытта әллә күпме ҡаршылыҡҡа осрайһың: йә таш, йә тағы берәй нәмә көрәккә тәртөлә. Шуның ише, сит тарафтарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ менән дуҫлыҡ ептәрен нығытыуы ла еңелдән түгел. Беҙ, әлбиттә, үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙы Башҡортостан территорияһына ҡушылырға саҡырырға йыйынмайбыҙ - бары тик халҡыбыҙ үҙенең тарихи сығанаҡтарын белһен өсөн генә тырышабыҙ...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Ужым - киске аш

Әсәһе дәрес әҙерләп ултырған улы янына килгән дә:
- Рус теленән уҡыныңмы? Миңә русса яуап бир, - ти икән.
Улы:
- Аҙыраҡ читаным, - тип яуап биргән.
Быны тыңлап ултырған атаһы улынан: "Ужым нимә була?", - тип һораған.
Башҡортса киске аш, - тип яуап биргән улы.

### Икәү - икәү инде

Ике ҡатын ат егеп, балалары менән eләккә барған. Ара йыраҡ ҡына булған. Еләк йыйып, һуңға ҡалған еләкселәр урманда ҡунырға булған. Арбала йоҡларға ятҡандар, атты шул арбаға бәйләгәндәр. Төндә ат ҡарағы быларҙың аттарын ысҡындырып алып киткән. Иртә менән уянһалар, ат юҡ, ҡайтырға ара йыраҡ. Нишләһендәр, ике ҡатын ат урынына егелеп, арбаны һөйрәп ҡайтҡан. Үҙҙәре бер-береһен йыуата икән:
-Икәү - икәү инде, атты бирһәк тә, арбаны бирмәнек.
Хәҙер шул һүҙҙәр беҙҙең яҡта лаҡап булып йөрөй.

### Бер ҡыйым бар инде

Элегерәк магазин ҡатын-ҡыҙҙарҙың йыйылып һөйләшер урыны булыр ине. Ауылдың бөтөн яңылыҡтары, хәбәр-хәтерҙәре, ваҡиғалары ошонда үтер, һөйләнер ине.

Шулай бер көн магазинға инеп, ике ҡатын хәбәр һалған: "Таһираның ҡыҙын һората килгәндәр, ти". Кибеттәге ҡатын-ҡыҙ "Аһ" итеп ҡалған. Шунда бер әсе теллеһе: "Хоҙайым, Таһираның ҡыҙын да һоратырҙар икән!" - тигән, геү килгән ҡатындар Таһираның килеп ингәнен дә абайламаған. Тегеһе быларҙы тыңлап бөткән дә:

- Мин нимә эшләгән? Ҡайны ерем кәм? Һуғым һуям, кеше саҡырам. Булһа, шул бер ҡыйым бар инде, - тигән.

Хәҙер беҙҙә берәйһен тикшерә башлаһалар, яуап әҙер: "Мин кемдән кәм? Һуғым һуям, кеше саҡырам. Булһа, шул бер ҡыйым бар инде".

### Йөрәкле кеше

Беҙҙең яҡта элегерәк бер ир ҡатыны өҫтөнән икенсе бисә алып ҡайтҡан. Йәшәп ята икән былар өсәүләшеп. Был ваҡиғаны ауыл ирҙәре ишетеп, "тикшереп" ултыра икән. Араларынан берәүһе:

- Ҡуй инде, егеттәр, йөрәкле кешеләр бар бит. Ике ҡатын менән торалар. Беҙ - берәү менән этә-төртә, - тигән.

### Түҙ, йөрәгем...

Берәү эсеүен ташларға булған. Күптәргә әйтеп тә ысҡындырған, һүҙ биргән. Эше араҡы һатылған кибет янында икән. Үтеп бара был, үҙе һөйләнә икән:

- Түҙ, йөрәгем, түҙ. Түҙһәң, аванстан бер ярты, получканан бер ярты.

Йөрәген услап үтеп киткән дә:

- Ай, рәхмәт, йөрәгем, түҙҙең. Шуның өсөн ризалатам үҙеңде, - тип, кибеткә боролған, ти.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

✓ Үҙебеҙҙә етештерелгән вакциналарҙы ҡурҡмайынса эшләтә алаһығыҙ. Бынан тыш, Рәсәйҙә етештерелгән вакцинаға полиоксидоний - кешенең иммун системаһын әүҙемләштерә торған матдә өҫтәлгән. Ул сит ил вакцинаһында юҡ.



ИНТЕРНЕТТАН



# ИКМӘК...

## барыһына ла баш

■ Канаданың сәләмәтлек проблемаларын тикшереү институты ғалимдары кәңәш итеүенсә, дарыуҙар ҡабул иткәндә грейпфрут емеше ашарға ярамай. Доктор Дэвид Бэйли белдереүенсә, грейпфрут дарыуҙың тәьҫирен арттырыу йәки уның көсөн кәметеү сифатына эйә. Ә был сәләмәтлек өсөн дә, пациенттың ғүмере өсөн дә хәүефле. Грейпфруттың составында булған фуранокумарин матдәһе ашҡаҙан-эсәк трактындағы энзимдарға тәьҫир итә һәм дарыуҙың үҙләштерелеү күрһәткестәрен үҙгәртә. Табиптар хәҙер был туралағы мәғлүмәттең дарыуҙарҙың ҡабына яҙылыуын талап итә.

■ Испания ғалимдары раҫлауынса, туҡланыу рационынында икмәк мотлаҡ булырға тейеш. Белгестәр йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуы хәүефе юғары булған 275 оло йәштәге кешене тикшергән. Һөҙөмтәлә, көн һайын икмәк ашаусыларҙың ҡаны күпкә сәләмәтерәк булыуы асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Рафаэль Ллорах билдәләүенсә, икмәк балансլы диетаның элементы булып тора. Икмәкте даими ҡулланыусыларҙың ҡанында инсулин кимәле лә түбән, был үҙ сиратында туҡымаларҙың инсулин тәьҫиренә бирешмәүен булдыра, тимәк, диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Диетологтар ҙа икмәк ашауға күптән ыңғай ҡарай. Улар фекеренсә, ҡала кешеһе был продуктты көнөнә 200 грамм ҡулланырға тейеш.

■ Бетесда Һаулыҡ һаҡлау милли институты (АҠШ) ғалимдары белдереүенсә, кизеү кисенләшкән осорҙа ҡулдар менән биткә тейеп алыу ғәҙәте был сирҙе йоҡтороу хәүефен тағы ла арттыра. Доктор Владимир Алонсо әйтеүенсә, танау йәки ауыҙға ҡулдары менән тейеп, кеше бактериялар һәм вирустарҙы йоҡтора. Ҡулдарҙы йыш йыуыу бынан ҡотҡармай, сөнки кеше әргәһендә бактериялар һаны һәр секунд һайын үҙгәреп тора. Бигерәк тә йәмәғәт урындарында кеше предметтарға сәғәтенә уртаса 3,3 тапҡыр тейеп алһа, битенә 3,6 тапҡыр ҡағыла икән. Ҡағиҙә булараҡ, беҙҙе иммунитет һаҡлаһа ла, кизеү эпидемияһы ваҡытында иғтибарлыраҡ булырға һәм ҡулдар менән биткә теймәскә тырышырға кәрәк, ти ғалимдар.

■ Италия ғалимы Луки Пассамонти кешегә үҙен бәхетле тойорға мөмкинлек биргән аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. "Алтын өс аҙыҡ" түбәндәгесә билдәләнгән: шоколад, ҡыҙыл ыуылдырыҡ, ҡыҙҙырылған картуф. Пассамонти раҫлауынса, тап ошо ризыҡтар ярһыуҙы еңергә ярҙам итә. Уларҙан һуң исемлекте һөт, сыр, ит, сәтләүектәр дауам итә. Шоколадка килгәндә иһә, белгестәр көнөнә 350 грамм шоколад ашау кире эмоцияларҙан ҡотҡара, тип белдерә. Улар составындағы триптофан һәм башҡа аминокислоталар тап ошондай тәьҫир көсөнә эйә.

■ Күп тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, массаж иммунитетты көсәйтеүсе сара булып тора. Лос-Анджелеста урынлашҡан Cedars-Sinai медицина үҙәге белгестәре швед массажын иң файҙалыһы тип тапҡан. Был массаж төрө дөйөм хәл торошон, организмда ҡан әйләнешен яҡшыртып ҡына ҡалмай, иммунитетты ла нығыта. Массаждан һуң лимфоциттар сифаты күтәрелә, был инде иммун системаһы көсөн әүҙемләштерә, шулай уҡ стресс гормоны вазопрессин кимәле түбәнәйә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КӨРӘШКӘ ӘҘЕРЛӘН...

## кизеүгә ҡаршы

**Көҙ көнө һалҡын тейҙереп ауырыусылар йышая. Һыуыҡ тейҙергәндән һуң барлыҡҡа килгән киҫкен респиратор ауырыуҙарҙан тыш, был осорҙа кизеү ҙә киҫкенләшә. Кизеүҙән нисек һаҡланырға? Вакциналау вирустың яңы штаммы менән ауырыуҙан ҡотҡарамы? Прививка эшләтеүҙең хәүефле яҡтары бармы? Бөгөн ошо һорауҙарға яуап эҙләйәсәкбеҙ.**



**➔ Кизеүҙе киҫкен респиратор ауырыуҙарынан нисек айырырға?**

Киҫкен респиратор-вируслы инфекция (ОРВИ) - йыйылма термин, унда 200-гә яҡын вирус төрө, шул иҫәптән кизеү ҙә инә. Тик кизеүҙең ауыр клиник эҙемтәләргә һәм өҙләгеүҙәргә килтереүен иҫәпкә алып, медицинала ул айырым ҡарала.

Кизеү ваҡытында кеше ҡапыл ауырып китә, уның хәле сәғәт һайын ауырлаша бара. Мәҫәлән, иртән торғанда ауырыу үҙен һиҙҙертмәй, әммә төшкә ҡарай тамаҡ ауырта, температура күтәрелә, кискә ҡарай бөтөнләй хәл бөтә. Температура 38-40 градус булһа, баш, бигерәк тә маңлай тирәһе нык ауыртһа, мускулдарҙа, быуындарҙа һыҙлау барлыҡҡа килһә, өшөтһә - был кизеүҙең билдәләре. Бындай саҡта күҙ алмаларын да ҡыбырлатып булмай, тәндең бар ағзалары ла ауыртҡан кеүек. Йүткереү, танау ҡыуышлығынан һыу ағыуы ауырый башлағандың өсөнсө көнөнә генә барлыҡҡа килә. ОРВИ-ның башҡа төрҙәрендә иһә вирустың төрөнә ҡарап, шунда уҡ тымау, ҡуҙҙарҙан йәш аға башлай, тән температураһы 37,5, иң юғарыһы 38 градус була. Ғәҙәттә, ауырыуҙың был осрағында барыһы ла әшкә йөрөүҙе дауам итә.

**➔ Кизеү нисек тарала?**

Кизеүҙең таралыуына һауа шарттары, мәҫәлән, һауа температураһының ҡапыл үҙгәреүе, һауаның еүеш булыуы, шулай уҡ организмдың төрлө сәбәптәр арҡаһында көсһөҙләнеүе сәбәпсе. Вирус һауа-тамсы юлы аша тарала. Йәғни, вирус тын алғанда, йүткергәндә, сөскөргәндә бүленеп сыға һәм һауа аша тарала.

**➔ Әлеге мәлдә кизеүгә ҡаршы прививкалар яһау миҙгеле башланды. Быйыл күпме прививка яһау планлаштырыла, кемдәргә ул бушлай яһаласаҡ?**

Йыл һайын федераль бюджеттан бүленгән саралар республикала 800 мең кешене, шул иҫәптән 300 мең баланы бушлай вакцинацияларға мөмкинлек бирә. Белгестәр әйтеүенсә, быйыл халыҡтың 25 процентына прививка яһау планлаштырыла, был миллиондан ашыу кеше. Былтыр был һан 23 процент булған. Кизеү вирусы ныҡлап таралмаһын өсөн халыҡтың 30-40 процентына прививка яһау талап ителә.

Федераль бюджет саралары иҫәбенә "хәүефле" төркөмгә бушлай вакцинация үткәрелә, был исемлеккә медицина һәм белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре, балалар баҡсаларына, түңәрәктәргә, секцияларға йөрөгән балалар, мәктәп уҡыусылары, студенттар, шулай уҡ 60 йәштә үткән ололар инә. Быйыл республика өс миллион һум аҡса бүлгән, уға кизеүгә ҡаршы 17 мендән ашыу доза һатып алынған. Был вакцина йыш һалҡын тейҙереп ауырыусыларға, шулай хроник сирлеләргә яһаласаҡ. Ҡалғандарға үҙ сәләмәтлеге тураһында үҙенә ҡайғыртырға тура киләсәк. Дарыуханаларҙа вакциналар һатыла башлаған, ул яҡынса 200 һум тирәһе тора, тип белдерә Башҡортостандың баш санитар табибы Евгений Степанов. Шулай уҡ республиканың медицина хеҙмәткәрҙәре эш биреүселәргә хеҙмәткәрҙәренең сәләмәтлеген ҡайғыртырға һәм вакциналар һатып алырға кәңәш итә. Һуңғы эпидемик күтәрелеш 2013 йылдың ғинуар-март айҙарында булған, ул ваҡытта 314 мең кеше, йәғни халыҡтың 7,7 проценты кизеү менән ауырыған.

**➔ Шулай ҙа, прививка яһатыу мотлаҡмы? Ул кире һөҙөмтә бирә аламы?**

Ғилми тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кизеүгә ҡаршы прививкалар ауырыуҙың таралыуын 90 процентҡа түбәнәйтә. Быны табиптар үткәргән статистик күҙәтеүҙәр ҙә раҫлай. Шуға ла республиканың баш санитар табибы уны мотлаҡ яһатыу кәрәк, тигән фекерҙә. Бигерәк тә балаларға, оло кешеләргә, йәғни кемдең иммунитеты түбән - прививка эшләтергә тырышырға кәрәк.

Прививканың кире тәьҫиренә килгәндә, аллергия менән яфаланыусыларҙа укол урыны ҡыҙарып, бер нисә көн ауыртып тороуы ихтимал. Һирәк осраҡтарҙа тән температураһы 37 градусҡа күтәрелеүе бар. Кизеүгә ҡаршы прививка, нигеҙҙә, кире тәьҫир булдырмай. Әммә прививка яһау алдынан табип тикшереү үткәрергә, тән температураһы күтәрелмәгәнме, кеше үҙен насар тоймаймы, хроник сирҙәре киҫкенләшмәгәнме икәнен белергә бурыслы. Бындай осраҡтарҙың береһе генә асыҡланһа ла, прививка яһалмай. Вакцинаның тәьҫире бер йыл һаҡлана. Ауырлы ҡатындарға прививка яһарғамы, юҡмы икәнлеген табип индивидуаль хәл итә.

**➔ Табиптар быйыл кизеүҙең ниндәй штаммы буласағын ҡайҙан белә?**

Кизеүҙең штаммы былай асыҡлана. Ғалимдар кизеүҙең ер шары буйлап хәрәкәтен өйрәнә. Мәҫәлән, Өфөлә мониторинг алып барыла, кизеү менән ауырыған кешеләр тикшерелә һәм бар мәғлүмәт Санкт-Петербург ҡалаһына - Кизеү институтына ебәрелә. Унан иһә бар мәғлүмәт дөйөмләштерелеп һәм Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) штабына оҙатыла. Тап ошо ойошмала бөтөн донъянан кизеү тураһында мәғлүмәт туплана. Быйыл Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы прививка составына өс штамм индереүҙе тәҡдим итте. Уларҙың икеүһе - халыҡ араһында сусҡа кизеүе булараҡ билдәле штамм, йәғни, кизеү А1 һәм кизеү А2 вирусы, йәғни "Виктория". Бер штамм яңы - В кизеүе вирусы "Массачусетс". Тәүге икеүһе менән алдағы йылдарҙа ауырыһаҡ та, һуңғыһына халыҡтың иммунитеты юҡ.

**➔ Прививкаларҙың ҡайҙа етештерелгәне яҡшыраҡ?**

Вакциналарҙың составы Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тәҡдиме буйынса яһала, тимәк, уларҙың составы бер үк. Тәьҫире ягынан улар шулай уҡ айырылмай тиерлек. Шуға ла үҙебеҙҙә етештерелгән вакциналарҙы ҡурҡмайынса эшләтә алаһығыҙ. Бынан тыш, Рәсәйҙә етештерелгән вакцинаға полиоксидоний - кешенең иммун системаһын әүҙемләштерә торған матдә өҫтәлгән. Ул бер сит ил вакцинаһында ла юҡ.

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ҠАРТЛЫҒЫНДА...
## ҡәҙер күргең килһә

-Эй, ҡыҙым, килдеңме? Рәхмәт яуһын инде. Аяҡ тотмай башлаға, саҡырткайным шул, - инәй карауатынан ҡалҡынды, әммә көүҙәһенә көсө етмәй, кире ятты.- Эй Аллам, ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел икән шул.

-Ҡыҙығыҙҙы котә инегеҙме әллә, инәй, - бер әйткәндән ишетмәне, ҡабатлап һораным.

-Ә һин кем һуң? Мин бит филшер ҡыҙ тип торам. Танымайым, яҡыныраҡ кил, - көс-хәл менән тороп ултырҙы, яулығы аҫтына ялпылдаған сәсен йәшерҙе, эргә-тирәһен һыпырып рәтләгән булды.

Аяғымды сисеп, карауат янындағы ултырғыстан урын алдым.

Ауылдың иң оло кешеһе тип ебәргәйнеләр мине уға. Ваҡытында "утка инер, сабып барған атты туктатыр ҡатын" тип кенә йөрөткәндәр ауылдаштары. Был инәйҙең, ысынлап та, ауыл, район тарихында үҙ эҙе бар. Аслығын да, яланғыслығын да етерлек татыған. Һуғыш һәм унан һуңғы йылдарҙың ауырлығын үҙ иңендә татыған. Ил иҡтисадын күтәреүгә, төбәкте алдынғылар иҫәбенә сығарыуға күп көс һалған. Тик һүҙем уның ниндәй маҡтаулы хеҙмәт юлы үтеүе тураһында түгел, ә ҡәҙер-хөрмәттә генә йәшәй торған осорҙа (инәй туғыҙынсы тиҫтәһен тултыра) япа-яңғыҙ көн күреүе хаҡында.

Аралашыуҙы, күҙгә ҡарап һөйләшеүҙе бик һағынған булһа кәрәк, карауатынан тороп, өҫтәл янындағы ултырғысҡа минә ҡаршы ултырҙы. Өс ҡыҙ, бер ул тәрбиәләп үҫтергән. Йәшләй генә тол ҡалып, балаларына әсәй ҙә, атай ҙа булған.

-Һоратыусылар булманы түгел, булды. Тик балаларҙы үгәйһетеп, кеше күҙенә ҡаратып ултыртҡым килмәне, - тип башланы ул үҙенең һүҙен.

Дүрт балаһына ла заманына күрә яҡшы итеп туй яһап, ҡулынан килгәнсә үҙ аллы тормош юлына баҫырға ярҙам иткән. Һикһәнгә тиклем мал-тыуарын да, ҡош-ҡортон да тотҡан. Бөгөн уның 13 ейән-ейәнсәре, алты бүлә-бүләсәре бар. Үҙе әйтмешләй, бер туйлыҡ, ике өмәлек. Тик шул тиклем ҙур ғаиләне булып та, инәй яңғыҙы һуң ул бөгөн, тиғән урынлы һорау тыуа.

Тағы бер ғаиләне миҫалға килтермәксемен.

Ҡасандыр күмәк бала тауышына күмелгән ҙур, ҡәммә бик иҫкергән тағы бер өйгә үтәм. Шунда уҡ корвалолдың ҡырҡыу еҫе танауҙы ярып инә. Ярым ҡараңғы бүлмәлә оло йәштәге бабай ҡара сәй эсеп ултыра. Мине күреү менән урынынан йәһәтләп торҙо. Үҙе:"Әсәһе, әйттем бит, балаларҙың береһе барыбер ҡайтыр тип",- тип минә ҡаршы килде. Ул арала төпкө бүлмәнән билен биштән быуған хужабикә килеп сыкты. Алты баланың береһе булһа ла ҡайтыр, тип өмөтләнгән булған икән улар. Көнләгәре көслө буран булып, йорт тулыһынса ҡар өйөмө уртаһында ҡалған. Шуға ла ҡарт әсә менән ата балаларының береһе булһа ла ҡайтып, "батшалар йәйәү йөрөй торған" урынға булһа ла юлды көрәп китер тип уйлаған.

-Балаларҙың һәр береһенең үҙ тормошо, хәсрәте бар, ҡайтмаһалар ҙа үпкәбеҙ юҡ инде ул, - уларға һүҙ тейҙергеһе килмәне ҡарттарҙың. Етем балаларҙың ҡарашы ни тиклем ҡыҙғаныс, үҙәккә үтерлек булһа, әлеге инәй менән бабайҙың күҙҙәре лә шул тиклем йәлләткес ине.

Эйе, итәк тултырып, бала үҫтереп тә, ологайғас, яңғыҙлыкта тилмергән әсәй-атайҙар байтаҡ арабыҙҙа. Бер үҙе йәшәгән яңғыҙ тигәндә аңлатмай бит әле, тиер кемдер. Бәхәсләшмәйем. Бер үҙе йәшәү менән яңғыҙлыҡ төшөнсәһе араһында айырма ла бар. Ысынлап та, бер үҙе йәшәп тә үҙен яңғыҙ тоймаған, киреһенсә, ошо яңғыҙлыҡҡа өҫтәнлек биргән, балаларының, ейәнейәнсәрҙәренең ығы-зығылы, шау-шыулы тормошонан ваз кискәндәр була. Ә кемдер балалары менән йәшәп тә үҙен яңғыҙ тойорға мөмкин. Тәүгеһе - ни эшләһә лә, ятһа-торһа ла, ауырыһа ла, йөрөһә лә - бер үҙе. Балаларына мәшәҡәт тыуҙырыуҙан йәки улынынмы-килененәнме, ҡыҙынынмы-кейәүенәнме ҡырын ҡарауынан ҡурҡып, ә, бәлки, оялып, яңғыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Ҡулынан килгәнсә йорт хәстәрен үҙенсә башҡарып, үҙенә шунан йәм табып, көнгөр-ҡаңғыр йәшәүен дауам итә. Ундайҙар, ғәҙәттә, яңғыҙ тормошона бөтөнләй зарланмай. Балалары, яҡындары араһында үҙен яңғыҙ тойғандарҙың хәле иһә аянысыраҡ. Тыштан, бәлки, улай тойолмаҫ та. Ундайҙарҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһа ла күңелдәре китек.

Бына тағы бер миҫал.

Район ауылдарының береһендә ташландыҡ тигәндәй йорттоң тәҙрәһендә ут күреп ингәйнем. Өҫтәл янында ана йығылам-бына йығылам, тип хәлһеҙ генә инәй баҫып тора. Ҡулында - сынаяҡ. Йөрәк өйәнәгенән дарыу эсә ине ул.

-Ике йыл тирәһе элек биш-алты ай тирәһе кесе улымда тороп ҡайтҡайным да ул. Түҙерлегем ҡалмағас, ҡайтып, тағы ошонда йығылдым, -ти яңғыҙлығын аҡлағандай. - Киленем дә, ейәнсәрҙәрем дә, хатта улым да мине ятһынды. Сығып киткәндә һаубуллашмайҙар, ҡайтҡанда ла иҫәнләшеү юҡ. Ашағанда ла бер-береһенә үсеккән һымаҡ, бер һүҙһеҙ ашайҙар ҙа тороп китәләр. Мин булғанға көйһеҙһенәгеҙме әллә, тип һорағайным, ризаһыҙлыҡ белдергәнемде генә көтөп йөргән кеүек, улым әллә нисә һүҙгә етте. Килен дә пенсиямды ҡыҙғаныу тураһында хәбәр һалды. Быға тиклем дә һүҙ минең пенсияға килеп терәлә ине. Аллаға шөкөр, пенсиям ҙур ғына. Шуны күрә алмай балалар, тора ла минең кеҫәләге аҡсаны һанайҙар. Ошо ваҡиғанан һуң ауылға ҡайттым да киттем.

Шунан инәй яҡыныраҡ килеп: "Бына әле байтаҡ пенсиям йыйылды. Мине ҡараһаң, һиңә бирермен", - тип ҡолаҡҡа шыбырҙаны.

Тәүҙә "таяҡҡа", һуңынан һуҡыр тингә эшләп, ҡартайғас ҡына ҡулына ысын аҡса тотҡан ҡайһы бер оло быуын вәкилдәренең, ысынлап та, аҡса йыйырға ҡомары уяна. Уны балалары менән бүлешеүҙән генә ҡурҡмай, хатта үҙҙәренән үҙҙәре ҡыҙғана, йәлләй. Үрҙә атап кителгән әбей ҙә аҡсаһын балаларына биреүҙән ҡурҡып, яңғыҙ йәшәй ине булһа кәрәк.

Яңғыҙлыкта йәшәгән ҡарт әсәйҙәрҙе йәки атайҙарҙы күргән һайын, үҙ-ара ниндәй генә мөнәсәбәт урынлашмаһын, балалары ғүмерҙәренең һуңғы сигенә тиклем атай-әсәһенә бурыслы булыуын онотorға тейеш түгеллеге иҫкә төшә...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# КИЛДЕМ. КҮРҘЕМ. ЕҢДЕМ



## Көсһөҙлөк көсө

*Дошмандарығыҙ һеҙҙе көсһөҙ тип иҫәпләй икән - был бик яҡшы. Әйҙә, ысын көсөгөҙ хаҡында яңылыш уйҙа булып, тантана кисерһен. Кәрәкле ваҡытта һеҙ уларҙың күңелен бик нык һүрелтәсәкһегеҙ.*

1316 йылда Лионда һан буйынса 196-сы Рим папаһын һайларға тейешле кардиналдар канклавы йыйыла. Һайлауҙар ваҡытында ике ҡапма-ҡаршы яҡ араһында бәхәстәр шул тиклем ҡыҙа, хатта Франция короле Оҙон Филипп V кардиналдар йыйылған собор ишеген томалап, бер фекергә килмәйенсә, уларҙы сығармаҫҡа бойора. Ҡаршы яҡтарҙың көстәре бер сама була, әммә бер кем дә сигенергә теләмәй. Әммә барыһы ла һайлауҙарҙың француз кардиналдарының береһенең, Кагорҙан килгән, ҡарап тороуға бөлтерәп бөткән һәм сирләшкә Жак д'Юэздың үлеме арҡаһында өҙәләүенән ҡурҡа. Бәхәстәр барышында ул ысын мәғәнәһендә хәл өҫтөндә була, уны һиу һәм һерҡә менән ҡоткарып алып ҡалырға тура килә. Һөҙөмтәлә яҡтар ундай ваҡытта ғәҙәти булған килешеү таба: тап уны һайларға һәм уның үлеменән һуң бәхәсте яңы шарттарҙа дауам итергә. Иҫәпле генә ай эсендә көстәр әллә ни үҙгәреш кисермәйәсәк, тип уйлай улар. Әммә һайлау үтеү менән яңы "папа Иоанн XXII" ҡапыл "терелә", үҙен Аллаһы Тәғәлә ҡотҡарҙы тип белдерә һәм тиҙ көндәрҙә бәхәсләшеүселәрҙе ҡыуып тарата. Шунан һуң ул 28 йыл дауамында изге Петрҙың тәхетендә ултыра, паства һәм сиркәү хеҙмәткәрҙәрен (церковниктар) талап, 750 мең флорин (хәҙергесә иҫәпләгәндә 76 миллионлыҡ) алтын туплап, 90 йәшенә етеп вафат була.

"Күләгәләге кеше" роле - әгәр уны аҡыл менән файҙаланғанда, сәйәсәттә иң ҡулайы. Дошмандарығыҙ һеҙҙе тейешенсә баһаламай икән - бик яҡшы. Әйҙә, һеҙҙе үҙҙәренең тырышлығына ла тормайһығыҙ, тип уйлаһындар һәм һеҙҙең яҡтан аҫтыртын эшмәкәрлек көтмәһендәр. Һәр саҡ уларҙы үҙегеҙҙең көсһөҙлөгөгөҙгә һәм инициативағыҙ булмауға ышандырығыҙ. Сәйәсәттә оппоненттарҙың ғәмһеҙлеге һәм алдан күрә белмәүсәнлегенән дә файҙалыраҡ арҡаҙаш юҡ.

**Сергей СУВОРОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун бишенсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Камиллыҡҡа өлгәшеүҙә ныҡлы ышаныс**

Үҙ-үҙеңде инандырыу теләктәрегеҙҙе тормошҡа ашырыуға ярҙам итә ала. Әгәр ниндәйҙер уйҙы ныҡышмалы рәүештә ҡабатлағанда, ул төпкө аңдың ҡеүәтле ҡатламына йоғонто яһай башлай. Идея һеҙҙең тарафтан тормошҡа ашырылыу өсөн ҡабул ителгәс, алда торған маҡсатҡа өлгәшеүгә йүнәлтелгән ихтыяр килеп ҡушыла. Был ысул, нисек кенә сәйер тойолмаһын, бик күп йылдар инде ҙур уңыш менән файҙаланыла. Американың йөҙҙәрсә уңышлы кешеһенең биографияһын өйрәнеүсе Наполеон Хилл үҙенең "Думай и богатей" китабында ошо ысулды ҡулланырға өндәй. Үҙ-үҙеңде инандырыу стратегияны бик һөҙөмтәле, шуға күрә уны үҙегеҙҙе камиллаштырыу арсеналына индерегеҙ. Түбәндә һеҙ көн дауамында ҡабатларға тейешле алты һөҙөмтәле раҫлау бирелә (уларҙы көслө эмоциональ көс һәм уларҙың хаҡлығына ышанып әйтергә кәрәк).

-Мин тыныс, көслө һәм бәхетле.
-Мин нимә теләйем, шуға эйәмен һәм рәхмәтлемен.
-Мин һәр көн яҡшырғандан-яҡшыра барам.
-Иң ҙур байлыҡ - ул уңыш.
-Миндә ҙур энергия һәм йәшәү көсө бар.
- Мин йәш, сәләмәт һәм тыныс.

**Икенсе бүлек: тән. Ғүмерҙе оҙайтыу**

Ғүмерҙе оҙайтыуға өлгәшеү буйынса кәңәштәрҙе 15 көн дауамында үтәгеҙ.

а) 50 йәштән һуң май биҙҙәре һөҙөмтәлелеген юғалта башлай. Тирегеҙ йәш һәм йомшаҡ булһын өсөн, ланолин йәки кокос майы, зәғфәрән йәки бойҙай булған дымландырғыстар һөртөгөҙ.

б) Бит тиреһе өсөн "Ретин-А" кремын һөртөп ҡарағыҙ. Унда "йәшлек эликсиры" бар һәм ул битгәге йыйырсыҡтарҙы тигеҙләй, тирене һәм тамырҙарҙы протеин менән туҡландыра, тиренең үле туҡымалары кәмеүен тиҙләтә.

в) Аэробика яһау менән бер рәттән, көүҙә ауырлығығыҙҙы даими контролләп тороу һеҙҙе йәшерәк күрһәтер.

г) Көн һайын тиҙ аҙымдар менән прогулкала йөрөгөҙ. Гарвард университетының элекке 16 936 студентының тормошон тикшереү физик күнекмәләр менән әүҙем шөғөлләнеүселәрҙең оҙағыраҡ йәшәүен күрһәтә.

**Өсөнсө бүлек: характер. Энтузиазм**

"Энтузиазмдан башҡа бер кемгә лә бер ҡасан да бер ниндәй бөйөк эш тә башҡарырға насип булғаны юҡ", - ти Ралф Уолдо Эмерсон. Ә Марк Твен үҙенең уңышын ябай ғына аңлата: "Мин донъяға тулҡынланыусы булып тыуғанмын". Тормошта уңыш ҡаҙаныусыларҙың ниндәй генә тарихын алып ҡарама, лидерҙар энтузиуазмды уңыштың иң төп аҫҡысы тип атай. Уны үҙеңдә үҫтереү өсөн күңелегеҙҙә осҡон дөрләтеүсе нәмәне табырға тейешһегеҙ. Һеҙгә үҙегеҙҙе көн һайын эш өҫтөлә артына сыныйр менән иртәнге туғыҙҙан киске алтыға тиклем бәйләп ҡуйыу мөһим түгел. Үҙегеҙгә нимә оҡшағанын асыклағыҙ ҙа, шуны эшләгеҙ. Шул эште башҡарғанда тыуған дәрт энтузиазмды тыуҙыра ла инде. Беләҙегегеҙгә тартҡы кейегеҙ, әйҙә. Ул һеҙҙең "энтузиазм билбауы" булһын. Хәҙер көн һайын башҡа берәүҙә лә булмағанса энтузиазм менән тулы икәнлегегеҙҙе тойоғоҙ. Тартҡы энтузиазмдың бик күп өҫтөнлөктәре һәм ошо көн дауамында энтузиазмға тулы һәм мәшғүл булыу ниәтегеҙ хаҡында иҫегеҙгә төшөрөп торасаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 21 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын отца народов". 1-2-я серии. Драматический сериал (16+).
23.30 "Василий Сталин. Расплата" (16+).
00.30 "Ты и я". Драма (12+).
02.15, 03.05 "Флирт со зверем". Комедийная мелодрама (12+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". "Горячие следы". 1-я серия. Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Земский доктор. Возвращение". Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Молога. Град обреченный".
00.50 "Девчата" (16+).
01.35 "Тайный план". Боевик (16+).
03.30 "Чак-5" (16+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Ҡош юлы". Йәмилә Халикова (6+)
10.15 "Замандаштар". Айрат Ғайсин (6+)
10.15 10.55 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Мәғәфүр Усманов (6+)
14.30 Урал Мортазин. Концерт (6+)
21.00 "Йырҙарыбыҙ һөйгән йәрҙәргә". Иҙел Нурғәлин, Юнир Һағынбаев (12+)

### БСТ
**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 "Новости недели" (16+).**
**14.40 "Я по земле иду".**
**14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Наши годы. 1980-е годы" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Шатлык йыры".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Орнамент".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**18.00 "Тәмле" (12+).**
**18.45 "Весело живем" (12+).**
**19.00 Телецентр (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (12+).**
**20.20 "Бизнес-обзор".**
**20.35 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Следопыт".**
**23.00 "Башҡорт йыры".**
**23.30 "Признание..." (12+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**02.00 Художественный фильм (16+).**
**03.30 М.Карим "Вечерняя трапеза" (12+).**
**05.30 "Белый войлок мира-2009".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 22 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+)..
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын отца народов". Сериал (16+).
23.30 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко".
00.40, 03.05 "Возлюбленные". Мелодрама (16+).
03.00 Новости.
03.25 "Народная медицина" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.50 "Ауаз".
09.45 "О самом главном" (12+).
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия" (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10" (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Земский доктор. Возвращение". Сериал (12+).
23.50 "Специальный корреспондент" (12+).
00.55 "Муза и генерал. Секретный роман Эйтингона" (12+).
02.00 "Обратной дороги нет".
03.25 "Чак-5" (16+).
04.20 "Комната смеха" (16+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.05 "Кәмит". Юмор (6+)
09.15 "Замандаштар". Миңлеғәфүр Зәйнетдинов (6+)
09.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Йырҙар (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йырҙарымда - ҡояшлы моң". Зөлфирә Фәрхетдинова (6+)
20.00 "Кис ултырып". Фидан һәм Азамат Ғафаровтар. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель" (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00, 23.00 "Башҡорт йыры".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Наши годы" (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Отдел культуры" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**18.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ.**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.30 "Указом Екатерины II".**
**23.45 "Специальный репортаж" (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**01.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**03.30 И.Юзеев "Ездили мы на Макаренскую ярмарку".**
**05.30 "Белый войлок мира-2009".**
**06.30 Полезные новости (12+).**

## 23 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын отца народов". Сериал (16+).
23.30 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко" (16+).
00.35 Корпорация "Святые моторы". Фэнтези (18+).
02.45, 03.05 "Келли от Джастина" (12+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Три дня". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть" .
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10" (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Земский доктор. Возвращение". Сериал (12+).
22.50 "Аллергия. Реквием по жизни?" Док. фильм (12+).
00.05 "Смертельный друг Р." (12+).
01.05 "Честный детектив" (16+).
01.40 "Обратной дороги нет".
03.05 "Чак-5" (16+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Урал Иҙелбаев. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып". Дим Мәннән иҫтәлегенә арналған концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 18.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2013".**
**14.45 "Наши годы" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**19.00 Телецентр (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (12+).**
**20.20 "Власть отвечает" (16+).**
**20.35 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 "Пятый угол" (16+).**
**23.45 "Чудо башкирской шали".**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 М.Гафури. "Черноликие" (12+).**
**05.45 "Мелодии души" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 24 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын отца народов" Сериал (16+).
23.30 "Соломон Волков. Диалоги с Евгением Евтушенко".
00.40 "Опасный метод". Триллер (16+).
02.30, 03.05 "Разборки в стиле кунг-фу". Боевик (12+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "От всей души".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Земский доктор. Возвращение". Сериал (12+) .
22.50 "Поединок" (12+).
00.25 "Космический камикадзе. Угол атаки космонавта Берегового" (12+).
01.30 "Обратной дороги нет".
03.00 "Чак-5" (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Риф Арыҫланов (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Музыкаль ҡумта". Лилиә Биктимерова (6+)
10.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ерем моңо". Рафаэль Сафин (6+)
20.30 "Кис ултырып". Мөхәббәтле парҙар дуэты (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 18.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45, 06.00 "Автограф".**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00"Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Власть отвечает" (16+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.15 "Сәләм+" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (6+).**
**20.20 "Көндәлек" (12+).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**23.30 "Баик-2013".**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Л.Герш. "Эти свободные бабочки" (12+).**

## 25 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес".
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 "Любовь". Мелодрама (16+).
03.00 "Свет во тьме" (16+).
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.05 "Ауаз".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.15 Дневник Сочи-2014.
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести ПФО".
17.30 "Тайны следствия-10". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир".
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты-3". Сериал (12+).
24.00 "Живой звук".
01.25 "Что скрывает любовь". Мелодрама (12+).
03.25 "Горячая десятка" (12+).
04.35 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Музыкаль ҡумта". Марсель Ҡотоев (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.50 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Илле йәш, елле йәш" Мират Хәкиев (6+)
20.00 "Кис ултырып". Айгөл Һағынбаева (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 18.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00, 23.00 "Башҡорт йыры".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.10 "Капитаномика" (12+).**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.30 "Дарман".**
**01.00 "В минуты отдыха". Концерт (12+).**
**03.30 Р.Киньзябаев. "Эх, друг Байтимер" (12+).**
**05.015 "Белый войлок мира-2009".**

## 26 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Десять негритят" (12+).
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб" "Джейк и пираты Нетландии".
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Тамара Семина. Соблазны и поклонники". К юбилею актрисы (12+).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Ледниковый период".
16.10 "Куб" (12+).
17.10 "Голос. За кадром" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
18.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.45 "Минута славы. Дорога на Олимп!" (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Успеть до полуночи" (16+).
23.35 "Что? Где? Когда?"
00.45 "Мой самый страшный кошмар". Комедия (16+).
02.35 "Проклятый путь" (16+).
04.45 "Народная медицина".

### РОССИЯ 1
04.50 "Алешкина любовь". Мелодрама.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан" (16+).
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
12.55 "Честный детектив" (16+).
12.25, 14.30 "Ее сердце". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Субботний вечер".
17.15 "Танцы со звездами". Сезон-2013.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Сводная сестра". Мелодрама (12+).
00.30 "Кактус и Елена". Мелодрама (12+).
02.45 "Головокружение". Триллер (16+).
04.25 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.35 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
09.15 "Ҡош юлы". Рамазан Йәнбәков (6+)
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йондоҙло сәғәт". Венер Йылҡыбаев (6+)
15.00 "Ҡыҙҙар ни өсөн илай". Спектакль (6+)
20.00 "Кавказ тотҡонбикәһе". Фильм (12+)
21.00 "Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00, 12.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 Фильм - детям. "Внимание, черепаха!"**
**08.40 Мультфильм (на башк. яз.).**
**09.00 "Сәләм". Специальный выпуск (12+).**
**10.00 "Көндәлек. Бурзянский район" (12+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**11.30 "Следопыт".**
**12.45 "Алтын тирмә".**
**13.30, 06.45 "Замандаштар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**15.00 "Автограф. Н.Мусин".**
**15.30 "Уралымдың сихри моңдары". Концерт.**
**16.00 "Телецентр" (на баш. яз.).**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. В перерывах: Новости.**
**19.30 "Еду в деревню".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Телецентр" (12+).**
**21.00 "Живое село" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Башҡорт йыры-2013".**
**22.45 "Наши годы" (12+).**
**23.15 "Отдел культуры" (12+).**
**23.45 "Казахские гастроли Башкирского академического" (12+).**
**00.30 Художественный фильм (16+).**
**02.00 "Уфа - город дружбы и единства" (12+).**
**04.15 Х.Ибрагимов. "Башмачки" (12+).**

## 27 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Десять негритят" (12+).
07.45 "Служу Отчизне!"
08.15 "Дисней-клуб". "Алладин".
08.40 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Истина где-то рядом" (16+).
12.45 "Самый лучший муж" (16+).
13.40 "Свадебный переполох" (12+).
14.45 "Идеальный побег". Док. фильм (16+).
15.50 "Все хиты "Юмор FM" на Первом". Концерт.
18.00 "Ледниковый период".
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Второй полуфинал (16+).
00.15 "Воды слонам!". Драма (16+).
02.30 "Человек, который любил оставаться собой". Драма (16+).

### РОССИЯ 1
05.40 "Дело № 306". Детектив.
07.20 "Вся Россия". "Маленькая большая страна".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Городок. Дайджест".
11.45 "Андрейка". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Андрейка". Продолжение (12+).
16.10 "Смеяться разрешается".
18.00 "Битва хоров".
20.00 "Вести недели".
21.30 "Проверка на любовь". Мелодрама (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Король бойцов". Остросюжетный фильм (16+).
03.20 "Планета собак".
03.50 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Музыкаль ҡумта" . Ришат Төхвәтуллин (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
11.50 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.30 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.45 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Альберт Салауатов. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып ". Зилә һәм Хәсән Усмановтар (6+)
00.00 "Дарман-шоу" концерт-дискотекаһы (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на баш. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Живое село" (12+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Байтус" (12+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30, 21.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**15.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.30 "Замандаштар" (12+0.**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа".**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Автограф".**
**17.00 "Хазина".**
**18.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**18.45 "Деловой Башкортостан".**
**19.00 "Любимое дело".**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Большой чемодан" (12+0.**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 " Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15 "Бизнес-обзор".**
**22.00 "Баик-2013".**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 Художественный фильм (16+).**
**03.45 М.Себастиан. "Мона" (16+).**

✓ *Кешеләр ғүмерҙәренең ике аҙнаһын светофорҙың йәшел уты янғанын көтөп үткәрә. Асыҡ күҙҙәр менән сәскәрәү мөмкин түгел. Күп миллионерҙарҙың ҡатындары һөнәре буйынса уҡытыусы.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДӘҮЛӘКӘН РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

## ЙЫЛМАЙҒАНДА...
## 40 мускул хәрәкәткә килә

- Кешеләр ғүмерҙәренең ике аҙнаһын светофорҙың йәшел уты янғанын көтөп үткәрә.
- Айҙа гольф өсөн өс туп бар.
- Бысраҡ ҡар тиҙерәк ирей.
- Офис өҫтәлендә бактериялар бәҙрәфкә ҡарағанда 400 тапҡыр күберәк.
- 1111111 һанын ошо уҡ һанға ҡабатлаһаң, 12345678654321 яуабы килеп сыға.
- Леонардо да Винчи Мона Лизаның ирендәрен 12 йыл буйына төшөргән.
- Асыҡ күҙҙәр менән сәскәрәү мөмкин түгел.
- Донъяла иң популяр һүҙ - "ОК".
- Алабамала мыйыҡ үҫтерергә ярамай, сөнки мыйыҡтарҙы күреп, сиркәүҙә кешеләрҙең көлөп ебәреүе ихтимал.
- Йылмайғанда 40 мускул хәрәкәткә килә, ә мылтыҡтың көйәҙһенә баҫыу өсөн - 4.
- Күп миллионерҙарҙың ҡатындары һөнәре буйынса уҡытыусы.
- 1 класҡа уҡырға барыусы бала төрлө компанияларҙың 200 логотибын айыра.
- 1932 йылда ҡыш шул тиклем һыуыҡ була, хатта Ниагара шарлауығы тулыһынса туңа.
- Альберт Эйнштейн үҙенең телефон номерын бер нисек тә хәтерендә ҡалдыра алмаған.

**41-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Ҡартлыҡ. Торричелли. Арат. Католик. "Икарус". Иртәнсәк. Лайм. Зәйнулла. Агрессор. Тәйәммүм. Тәһәрәт. Рәкәғәт. Ләлә. Саҡырым. Матбаға. Әсә. Витр. Тамуҡ. Тажетдинов. Ғәлләмов. Лото. Изел. Сөсәк. Лотос. Әсәд. Трест. Залп. Бәйғәмбәр. Киҫкә. Өйлә.

**Вертикаль буйынса:** Азот. Ниғмәтуллин. Һалдат. Тел. Кинйә. Брутто. Әжәл. Турку. Кавалерист. Астат. Робаги. Ҡарабойҙай. Иблис. Тәғәнә. Ислам. Трепак. Вәғәз. Мәкә. Имам. Ғөсөл. Илтер. Рәсүлев. Рәшә. Идол. Ҡамәт. Нөсхә. Рәшәткә. Ғәрәфә. Сорто. Карат. Мөсә. Вирд.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Октябрь (Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (16) дүшәмбе | 7:29 | 8:59 | 14:30 | 17:31 | 19:01 | 20:31 |
| 22 (17) шишәмбе | 7:31 | 9:01 | 14:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |
| 23 (18) шаршамбы | 7:33 | 9:03 | 14:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 24 (19) кесе йома | 7:35 | 9:05 | 14:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |
| 25 (20) йома | 7:37 | 9:07 | 14:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 26 (21) шәмбе | 7:39 | 9:09 | 14:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 27 (22) йәкшәмбе | 7:41 | 9:11 | 14:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҠОТЛАЙБЫҘ!*



Хөрмәтле коллегабыҙ, абруйлы етәксебеҙ, фиҙаҡәр йәмәғәт эшмәкәре, танылған журналист, мәртәбәле әсәй, миһырбанлы өләсәй, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире

**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВАны**

алтын юбилейы менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ, барлыҡ маҡсат-хыялдарының, ниәт-теләктәренең Хаҡ Тәғәләбеҙҙең "Амин" тигән сағына тап килеп, тормошҡа ашыуын теләйбеҙ!

Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы, әгәр ҙә һеҙҙәге ил һәм милләт өсөн тоғролоҡ, һеҙҙәге фиҙаҡәрлек, һеҙҙәге ҡаһарманлыҡ, һеҙҙәге ялҡын барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙа һәм ираттарҙа булһа, илебеҙ һәм милләтебеҙ бөгөн күпкә камилыраҡ йәмғиәт үә дәүләт төҙөп, күпкә бәхетлерәк йәшәр ине! Эшләгән эштәрегеҙ, изгелектәрегеҙ үҙегеҙгә меңләтә изгелек булып ҡайтһын!

**"Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

**20 октябрь "Мулла"** (Т.Миңнуллин), драматик хикәйә

**23 октябрь "Руди - Never off..."** (А.Абушахманов), ғүмер миҙгелдәре

**24 октябрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н.Асанбаев), тарихи драма

**25 октябрь "Хыял диңгеҙе"** (Ф.Бүләков), комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 октябрь "Тоҡ эсендәге бесәй йәки башкирская пленница"** (М.Кәрим), спектакль-концерт. Башлана 18.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 октябрь "Күңелдәре моңло, ғүмерҙәре йырлы"** исемле башҡорт халыҡ йырҙарынан ғына торған концерт тәҡдим итә. Нәзифә Ҡадырова, Рәсүл Ҡарабулатов, Вәхит Хызыров, Гүзәл Үлмәсҡолова, Миңзифа Исҡужина, Римма Амангилдина, Әлфиә Юлсурина, Фәнәүи Сәлихов һәм башҡа сәхнә оҫталары башҡарыуында "Зөлхизә", "Ғилмияза", "Шәүрә", "Мәзинәкәй", "Буранбай", "Бейеш", "Абдрахман", "Азамат" һәм башҡа мәшһүр йырҙарыбыҙҙы тыңлай алаҫаҡһығыҙ.

**Кем алыҡ?**

Ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап биреүселәр был концертҡа саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк.

**1.** Репертуарында күбеһенсә халыҡ йырҙары өҫтөнлөк иткән ике йырсыны атағыҙ.

**2.** Өс шаян башҡорт халыҡ йырын атағыҙ.

**Тел.: 252-39-99**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИНТЕРНЕТТА БАШҠОРТСА АРАЛАШ!

**Мәскәү дизайнеры Илдар Кинйәбулатов 30 энтузиаст-тәржемәсе менән берлектә "Бәйләнештә" (vk.com) социаль селтәрендә башҡорт телендәге интерфейс уйлап тапты. Хәҙер социаль селтәрҙә теркәлгән һәр ҡулланыусы, үҙенең аккаунты аша көйләүҙәргә инеп, интерфейста һүрәтләнһен өсөн башҡорт телен дә һайлай ала.**

Проект өҫтөндә эш алты йыл барған, уның барышында 17 мең текст тәржемә ителгән, Интернет терминдарына ярашлы яңы һүҙҙәр уйлап сығарылған. Тәржемәселәр араһында яҙыусылар, уҡытыусылар, журналистар булған. "Бәйләнештә"ге тәржемәләр быйыл июль айында башлана. Интерфейска күсеү һәм башҡорт теленә тәржемә итеү мөмкинлеге тураһында килешеү сайт хакимиәте менән алдан төҙөлә. Тәржемә ителгән версияны махсус серверға күсергәндән һуң, уны "Бәйләнештә" һәр кем ҡуллана ала.

- Проект өҫтөндә эшләгәндә заманса һүҙҙәрҙе тәржемә итергә башҡортса һүҙлектәр етмәне, - тип һөйләй дизайнер Ирек Кинйәбулатов. -Интернетта һәм "Бәйләнештә" ҡабул ителгән махсус терминдарҙы беҙ үҙаллы мөмкин тиклем дөрөҫ тәржемә итергә тырыштыҡ, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары менән кәңәшләштек. Йыйылған мәғлүмәттәр башҡортса һүҙлектең проект нигеҙенә ятты, уның өҫтөндә эш дауам иттерелә.

Рәсми эшләй башлағандан алып ике аҙна эсендә тәржемәселәр табылған хаталарҙы төҙәтәсәк, "Бәйләнештә" дөрөҫ тәржемә ителмәгән осраҡ асыҡланһа, хәбәр яҙыр өсөн "ВК башҡорт телендә" төркөмөндә махсус тема бар.

Илдар Кинйәбулатов - веб-дизайнер, Мәскәүҙә йәшәй. Автомобилдәр һәм график дизайн, типографика һәм шрифтар, музыка яҙыу һәм лингвистика менән ҡыҙыҡһына. Android системаһы һәм MacOS өсөн клавиатураның башҡортса тупланмаһын уйлап сығарған.

# МӘСКӘҮҘӘ - РЕСПУБЛИКА КӨНӨ



**Башҡортостан Республикаһы байрамы ваҡытында Мәскәү үҙәге буйлап ғәҙәти булмаған, башҡорт орнаменттары менән биҙәлгән музыкаль-экскурсия троллейбусы йөрөнө. Көн дауамында Садовое кольцо буйлап ул өс түңәрәк яһаны.**

Беренсе әйләнештә троллейбус быйыл Мәскәү юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән, мегаполис менән таныша башлаған, республиканың беренсе курс студенттарын ултыртты. Икенсе рейс пассажирҙарын өлкәнерәк йәштәгеләр, Мәскәүҙә йәшәүсе Башҡортостан кешеләре, ә өсөнсө рейста - Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан Республикаһы студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы активистары тәшкил итте.

2013 йыл барышында Мәскәүҙә "Мәскәү - беҙҙең уртаҡ йортобоҙ" акцияһы барҙы һәм унда Рәсәйҙең 80-дән ашыу төбәгенән яҡташтар ойошмалары үҙҙәрен күрһәтте. Уның ойоштороусылары - Мәскәү ҡалаһы Хөкүмәтенең Төбәк-ара хеҙмәттәшлек, милли сәйәсәт һәм дини ойошмалар менән бәйләнеш департаменты.Ошо акция сиктәрендә ойошторолған әлеге күсмә экскурсион-музыкаль салонға әүерелгән троллейбус "Башҡортостан яҡташтары" Мәскәү Төбәк йәмәғәт ойошмаһы тарафынан Республика көнөнә ҡарата әҙерләнгән зур программаның бер өлөшө булып торҙо. Троллейбус Өфөнөң һоҡланғыс фото күренештәре, Башҡортостандың мәҙәни һәм тәбиғи ҡомартҡылары фотолары менән биҙәлгәйне. Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан Республикаһы студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы студенттары троллейбус салонында ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнаны, башҡортса йырланы, республика тураһында һөйләне. Акция мәскәүлеләрҙә зур ҡыҙыҡһыныу уятты, ә унда ҡатнашыусылар яҡшы, йылы тәьҫораттар алып, бер мәлгә үҙҙәрен бәләкәй ватанына ҡайтып килгәндәй хис итте.

"Башҡорт" троллейбусынан трансляция бөтә Садовое кольцо буйлап ишетелде - репродукторҙар аша ҡурай моңона ҡушылып Мәскәүҙә Республика көнөн үткәреү тураһында иғлан яңғыраны. Ә Республика көнөнә арналған сара Бөтә Рәсәй күргәҙмәләр үҙәгенең 62-се павильонында дауам итте. Павильонға килеүселәр был көндә популяр "Каруанһарай" төркөмө сығышын тыңланы, милли аш-һыуҙан ауыҙ итте, иң бәләкәстәр өсөн башҡорт телендә бушлай йәнһүрәт сеансын, "Халыҡ ритайымы" программаһын тамаша ҡылды, башҡортса дискотекала бейене, башҡорт сувенирҙары, китаптар, гәзиттәр һәм журналдар, ҡымыҙ, милли ашамлыҡтар һатып алды.

ЗӘҢГӘР ЭКРАНДАРҘА



# КҮҢЕЛДӘГЕ ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Уҙып барған йыл республикабыҙҙа Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителгәйне. Йыл аҙағына яҡынлашҡанда Башҡортостан юлдаш каналы 26 октябрҙә тапшырыуҙарын тәбиғәт темаһына арнарға һәм йыл буйы низәр эшләнгәнен барларға, шулай уҡ хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе билдәләргә ҡарар итте.**

Шәмбе булыуға ҡарамаҫтан, был көндә "Сәләм" тапшырыуы эфирға сығасаҡ. Унда Башҡортостан тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыевтың ҡатнашыуы көтөлә. "Башҡортостан флораһын һәм фаунаһын беләһеңме?" тигән викторина бик ҡыҙыҡ булмаҡсы. Унда еңеүселәргә бүләктәр ҙә әҙерләнә.

Сәғәт 10-да эфирға сығасаҡ "Көндәлек" тапшырыуы Башҡортостандың иң серле, иң ғәжәп мөйөшөндә - Бөрйән районында төшөрөлдө.

"Следопыт" тапшырыуы авторҙары һәр ваҡыттағыса аныҡ эш күрһәтә. Был юлы Вил Кәримов, Юрий Туманов һәм Гүзәл Хәмитова тәбиғәтебеҙҙең уникаль һәйкәле - "Аҫҡын" боҙ мәмерйәһендә өмә ойошторҙо, Аҫҡын йылғаһын сүп-сарҙан таҙартты.

Башҡорт әҙәбиәтендә тәбиғәт темаһы иң тәү сиратта яҙыусыНоғман Мусин иseме менән бәйле, шуға ла журналист Гөлдәр Ҡужина "Автограф" тапшырыуына герой итеп "Мәңгелек урман" хужаһын һайлаған. "Сихри миҙгелдәрҙән торған кеше ғүмере һуңынан мәңгелеккә тоташа. Тәбиғәт беҙҙе шулай яралтҡан. Ошо сылбырҙы өҙмәү өсөн үҙеңдең күңел тәбиғәтеңә иғтибарлыраҡ булыу кәрәк. Тормоштоң мәңгелеге беҙҙең хис-тойғолар сафлығынан һәм ҡайнарлығынан тора", - ти яҙыусы.

"Алтын тирмә" телевикторинаһында шифалы үләндәр менән дауалаусылар көс һынаша. "Тамыр" балалар студияһы ла дөйөм эштән ситтә ҡалмай. Улар "Тау-тау хәбәр" өсөн һыу, һауа тураһында яҙмалар әҙерләй, экология мәсьәләләре менән шөғөлләнгән уҡыусылар менән студияла һөйләшеү ойоштора. Ә инде "Телеүҙәк" тапшырыуында тәбиғәткә ҡағылышлы ҡиҫкен мәсьәләләр, айырым иғтибар талап иткән проблемалар хаҡында һөйләшеү көтөлә.

26 октябрь, шәмбе көнө, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында - барыһы ла тәбиғәт хаҡында!

**Юлиә КИРӘЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘҘӘПЛЕЛЕК БИЛДӘҺЕ...

## әйелеп сәләм биргәне

Аяғына тартһа, башына юҡ, башына тартһа, аяғына юҡ - йүнһеҙ ирҙең көнө шул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр кем белергә тейешле берҙән-бер ҡағиҙә - ул үҙ нервыларыңды ҡаҡшатыу иҫәбенә изгелек эшләй белеү.

**(Артур Адамов).**

Ирҙәргә уның тураһында нимә уйлауҙары ҡыҙыҡ, ә ҡатын-ҡыҙға уның тураһында нимә һөйләүҙәре мөһим.

**(Теодор Гиппель).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡалала бер ҡарт йәшәгән. Ул көн дә ҡала ситенә сығып, тауҙарға артылырға, тирә-яҡты күҙәтергә, яңғыҙ ғына ҡалып донъя тураһында уйланырға яратҡан. Бер саҡ уның эргәһенән бер юлсы үтеп бара икән.**

**-Был ҡалала ниндәйерәк халыҡ йәшәй?- тип һораған ул тәрән уйға батып ултырған ҡарттан.- Төпләнеп йәшәр урын эҙләйем, шуға ла миңә бында ниндәй кешеләр йәшәгәнен белеү бик тә мөһим, - тип тә өҫтәгән.**

**Ҡарт һорауға ҡаршы һорау менән яуап биргән:**

**-Ә һинең быға тиклем көн күргән ҡалаңда ниндәй кешеләр йәшәй ине һуң?**

**- Бик алама халыҡ йәшәй ине, - тип яуаплаған юлсы. -Тупаҫтар, үҙҙәренән башҡа бер кемде лә танымаған, изгелек күрһәтмәгән, ҡыҫыын ҡар ҙа һорап алып булмай торған һаран әҙәмдәр. Шуға ла мин ул ҡаланы ташлап китергә мәжбүр булдым...**

**- Улайһа, һеҙгә ары китеп, йәшәү өсөн икенсе урын эҙләргә кәрәк буласаҡ. Был ҡалала ла шундай уҡ тупаҫ һәм һаран халыҡ йәшәй, - тип яуаплаған ҡарт.**

**Юлсы ары киткән. Ҡарт яңғыҙы уйланып ултырып ҡалған. Икенсе көнөнә тау башында ултырған ҡарт эргәһендә оло йөк артмаҡлаған икенсе бер юлсы туҡтаған һәм шулай тип һүҙ ҡатҡан:**

**- Әйтегеҙ әле, был ҡалала кемдәр йәшәй? Төпләнеп, нигеҙ ҡороп йәшәр урын эҙләй инем...**

**- Ә һин күсеп киткән ҡалала кемдәр йәшәй ине һуң?- тип тағы һорауға ҡаршы һорау биргән ҡарт.**

**-Был турала һөйләүе бик ҡыйын миңә, - тигән юлсы. - Ул ҡалала бик ҡыйыу, изгелекле, хәстәрлекле, ярҙамсыл, татыу, ситтәргә һуңғы ҡулдәген сисеп бирергә әҙер йомарт кешеләр йәшәй ине. Унан күсеп китеү миңә бик ҡыйын булды...**

**Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡарт киң йылмайған һәм бик тә ҡәнәғәт ҡалып, шулай тигән:**

**- Улайһа, рәхим ит беҙҙең ҡалаға. Бында ла һин үҙ ҡалаңдағы кеүек матур, изгелекле кешеләр менән осрашырһың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**

Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3886